*✓ Теләһә кемдән:"Һин был тормошта ни теләйһең? - тип һорағыҙ, ул мотлаҡ:"Бәхетле булырға теләйем",- тип яуап ҡайтарасаҡ. Иң тәүҙә шуны аңлау кәрәк: төрлө хәл-ваҡиғалар түгел, ә уйҙар бәхетһеҙ итә кешене. Шуға ла уйҙарҙы теҙгенләргә өйрәнеп, үҙ бәхетең менән дә идара итеп була.*

**Адам ДЖЕКСОН.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12 - 18 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№46 (464)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Милләт әсәһе,**

йәки Рабиға Ҡушаева тураһында бер кәлимә һүҙ



7

**Тәбиғәтте алдап булмай,**

уны аңлауы ла еңелдән түгел...



8-9

**Тиктормаҫлығы...**

уңыш яулау ҡоралы



11

**Ҡәйнәләр институты булһа...**

ҡәйнәмде ректор итеп күрергә теләр инем



12-13

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Беҙ, өлкәндәр, йәштәрҙән күберәк ғәйеп эҙләргә тырышабыҙ. Ә бит улар беҙҙән, өлкән быуындан, ата-әсәһенән өлгө ала. Тимәк, өлкәндәр үҙҙәренең ғәйебе өсөн "тупәләй" булып сыға түгелме йәштәрҙе?

***Рауфан МОРТАЗИН, космоэнергетика магистры, халыҡ табибы:*** Бала, ысынлап та, ата-әсәһенән күреп үҫә. Йәғни ғаиләлә ниндәй тәрбиә алһа, ул шундай була. Шуға күрә йәштәрҙе тиргәүҙең мәғәнәһе юҡ, сөнки, әйтеүемсә, улар үҙҙәренең тәртибе менән өлкәндәр өлгөһөн ҡабатлай. Мәҫәлән, ябай ғына бер күренеш: 1 йәшлек кенә сабый ул, ләкин иртәнсәк һайын минең физик күнегеүҙәр яһағанды ҡарап тора һәм шуны ҡабатлай башлай. Был, ярай, яҡшы өлгө. Ә бит ҡайһы бер ата-әсәләр тәртип боҙған балаһына өйрәтеп бер ни ҙә әйтә алмай, сөнки был бала уларҙың үҙҙәренең ҡылығын ҡабатлай бит. Бәләкәй балалар был донъяға бик һәләтле булып тыуа, уларҙы "индиго" тип атап йөрөтәләр. Беҙҙең тәрбиә ҡанундары уларҙың аң-фиғеленә тап килмәй, киреһенсә, улар үҙҙәре өлкәндәрҙе нимәгәлер өйрәтә, уникаль фекерләү ҡеүәһенә эйә булалар улар. Үкенескә ҡаршы, үҫә төшә уларҙың күпселеге ҡалыпҡа һалып һуғылған кирбестәр ише бер төрлөгә, ҡәҙимге кешеләргә әүерелә: өлкәндәр "мәктәбен" үтеп, әлеге тәрбиә ҡанундарына, заман мөхите шарттарына яраҡлаша.

Бәләкәй балалар иһә икенсерәк төрлө, интуитив нигеҙҙә тәрбиә ала, шуға ла уларҙың күрәләтә насар ғәҙәттәргә һәләте булмай. Сабыйҙар саф, таҙа күңелле, сөнки уларҙың асылы мөхәббәт менән мөлдөрәмә тулы була. Был күренеште яҡшыраҡ аңлар өсөн шартлы рәүештә 7-10 йәшлек балаларҙы ил хужалары урынына ҡуйып ҡарайыҡ әле: ул саҡта Ер йөҙөндә һуғыштар булмаҫ ине. Үкенескә ҡаршы, балаларҙың сафлығы улар үҫә төшкәс, ололар йоғонтоһонда әкренләп бысраныуға дусар ителә башлай. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, сабыйҙар өсөн ниндәй генә мультфильмдар уйлап сығармай донъяның "ижад" әһелдәре! Том менән Джерриҙың мажараларын ғына алайыҡ: береһе икенсеһенең башына йәлпәштергәнсе таба менән килтереп һуға икән, был урында иларға түгел, ә сәпәкәйләп көлөргә тәкдим итә бит мультик авторҙары! Шунан беҙ балаларға ҡайҙан килә агрессия, ҡаты бәғерлелек, тип аптырайбыҙ.

***Рәшит ШӘКУР, яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор:*** Балалар һәм атайҙар проблемаһы һәр дәүерҙә лә йәшәп килә торған мәсьәлә ул. Бынан меңәр йылдар элек йәшәгән аҡыл эйәһе Аристотелдең "Йәштәр аҙҙы!" тигән һүҙҙәре бөгөнгө көндә лә беҙҙең алда тора. Йәштәр өлкәндәр йоғонтоһонда боҙола, тип әйтеүҙән алда мин барыбер шуны тәкрәрләр инем: кемдең ниндәй юл һайлауы - насар яҡҡамы, яҡшылыҡҡамы - һәр кемдең үҙ ихтыярында. Насар булырға теләйһең икән, быны өсөн мөмкинлектәр һәм саралар тулып ята. Әгәр инде яҡшыны эҙләргә теләһәң, уны шулай уҡ аҙым һайын табырға була. Иң мөһиме - кешенең теләгендә, уның үҙ-үҙен яҡшыға көйләүендә. Кешенең үҙендә яҡшы сифаттар тәрбиәләргә ынтылыш һәм үҙендәге насар сифаттарҙан ҡотолоу теләге бар икән, тимәк, был кешегә өмөт бар: ул насар юлдан китмәйәсәк. Өлкәндәрҙең насар йоғонтоһо тигәндән, был тәңгәлдә шундай бер парадокс та бар: ҡайһы саҡ йәштәргә ғибрәт тәрбиә сараһы булараҡ та йоғонто яһап ҡуя. Йәғни ҡайһы бер зирәгерәк йәштәр насарҙан өлгө түгел, ә ғибрәт, һабаҡ ала һәм яҡшы юлда ҡала. Ошоға бәйле былтыр йәй ауылда ял иткәндә ҡаланан олатаһына ҡунаҡҡа килгән бер малай менән булған осрашыу иҫкә төштө. Йылға буйында күңелһеҙләнеп кенә йөрөп ята малай. "Олатайым иҫерек, көн дә араҡы эсә, минә күңелһеҙ", ти был. Шул саҡ мин уға: "Бына күрәһеңме: кеше араҡы эсһә, үҙенә генә түгел, башҡаларға ла насар була, шуға күрә үҫкәс, олатайың кеүек булма, яҡшы кеше бул",- тип бер аҙ аҡыл өйрәтеп, аламалыҡтан ғибрәт дәресе биреп киттем. Ябай ғына һөйләшеү тойолһа ла, тап мәлендә һәм тере миҫал аша балаға дөрөҫөн әйтеү мөһим тәрбиәүи алым, был уның иҫендә ҡаласаҡ. Иң мөһиме - кәрәкле мәлендә баланың, йәштәрҙең эргәһендә өйрәтеүсеһе, һабаҡ биреүсеһе булһын ине. Был бит уның ғүмер юлына йүнәлеш биреү була һәм ул буштан-юҡҡа ҡоро хәбәр һатып, нәсихәт уҡыуға ҡарағанда тәьҫирлерәк, минеңсә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## БИТТӘРЕНӘН НУР БӨРКӨЛӘ

**"Киске Өфө" гәзитен аҙна һайын ҡәҙерле ҡунаҡ ҡаршылағандай көтөп алам, яратып уҡыйым. Бына әле һеҙгә хат яҙған мәлдә лә минең ҡулымда "Киске Өфө" гәзите.**

Бына бит ниндәй рухи хазина бүләк иттегеҙ халҡыбыҙға! Юғиһә, донъяға ла, уҡыусыларына ла бер ниндәй мөнәсәбәт белдермәгән баҫмалар ялҡыткайны инде һуңғы йылдарҙа. Ниһайәт, мин үҙемә рухташ, юлдаш булырҙай тотош бер донъяға юлыҡтым һәм бик ҡәнәғәтмен.

Иң тәүҙә, гәзитебеҙҙең аҡыл һатмайынса, матур, йәтеш итеп кенә кеше күңеленә иман нигеҙҙәре һеңдереүе оҡшай. Әйтерһең дә, нур бөркөлә был гәзит биттәренән. Илебеҙ, халҡыбыҙ тарихының әлегәсә бигүк билдәле булмаған биттәрен асыуы менән дә ҡиммәтле ул. Башҡортостаныбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре, яҙыусылар, тарихсылар, табиптар, эшҡыуарҙар менән "Монолог" һәм "Диалог"тар бер тынала уҡыла. Күп материалдарҙы мин дәрестә тәрбиәүи сара булараҡ файҙаланам. Уҡытыусы кеше өсөн баһалап бөткөһөҙ дәреслек, әсбап һымаҡ инде ул гәзит.

**Әлфиә ЙОМАҒУЖИНА,**
**уҡытыусы.**
**Баймаҡ районы Ғүмәр ауылы.**



✓ *Шул ваҡыт халыҡ араһынан берәү: "Үҙебеҙҙең ҡарғаларҙы ситкә ебәреү юҡ, үҙемә һат!"- тип ҡысҡырҙы. Китте һатыулашыу, "аҫыл" ҡошто берәүҙең дә ҡулдан ысҡындырғыһы килмәй бит.*



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# БЫНДАЙ ХӘЙЛӘГӘ...
## иң муттар ғына һәләтле



**Гәзиттәге яңы рубриканы ҡыҙыҡһынып уҡып барам. Донъя ауырлығына һылтанып ултырмай, юҡтан бар итеп, ғаиләһенә аҡса килтерерҙәй шөғөл тапҡан кешеләрҙең күплеге ҡыуандыра. Өҫтәмә килем алыу мәсьәләһен хәл иткәндә мәҙәк хәлдәргә лә осрап ҡуяһың ул. Гәзит уҡыусыларға нәҡ ошондай бер ваҡиға тураһында һөйләмәксемен. Ваҡиғаға үҙем шаһит, шуға күрә дөрөҫлөккә шикләнергә урын юҡ.**

Республикабыҙҙың район-ҡалаларында йыл да гөрләп-шаулап һабантуйҙар үтә. Бер йыл шулай һабантуйҙа, сауҙа нөктәләре рәтендә, ҡулдан эшләнгән ситлек эсенә ике ҡарға ултыртып алған танышым Сабит баҫып тора. Ҡарғалар, Сабиттың һүҙ ҡушып, баштарынан һыйпауына яуап итеп, ваҡыты-ваҡыты менән ҡысҡырып-ҡысҡырып ала. Быға тиклем бындай хәлде күрмәгән халыҡ Сабит эргәһенә йыйылып китте. Халыҡ төркөмөнә байрам күрергә килгән күрше өлкә урыҫтары ла килеп ҡушылды. "Что за чудеса? Как они по команде только кричат?"- тип һорай былар, ә Сабит иҫе китмәй генә: "Өйрәтелгән, бик аҡыллы ҡоштар", - тигән була. "Продай-ка нам, а!"- тип ныҡыша башланы урыҫтар. "Так-то не для продажи они", - тип эре сирттерә Сабит. Әммә бер ниндәй экзотиканы ла урап үтергә күнекмәгән бай ҡунаҡтар тиҙ генә бирешергә уйламай. Шул ваҡыт халыҡ араһынан берәү: "Үҙебеҙҙең ҡарғаларҙы ситкә ебәреү юҡ, үҙемә һат!"- тип ҡысҡырҙы. Китте һатыулашыу, "аҫыл" ҡошто берәүҙең дә ҡулдан ысҡындырғыһы килмәй бит. Хаҡ мең һумға барып еткәс, икенсе һатып алырға теләүсе ҡулын һелтәп, ситкә китте, ә урыҫтар, ҙур еңеүгә өлгәшкән кеше ҡиәфәтендә, ҡарғалар ултырған ситлекте (әйткәндәй, Сабит ситлек өсөн "Ручная работа" тип айырым хаҡ алып ҡалды) тотоп, шатланышып китеп барҙы. Сабит: "Ҡоштарҙың депрессияһы булырға мөмкин, шуға күрә бер-ике көн тауыш бирмәҫтәр", - тип, 1300 һум аҡсаһын тотоп, һатып алыусыларын оҙатып ҡалды.

Һатып алыусылар киткәс, Сабит ҡоштарҙың бойороҡ буйынса ғына ҡысҡырыу серен систе. Баҡтиһәң, ҡоштоң башын һыйпаған булып, йөнөнән тартҡан икән. Ҡысҡырмай ҡара шул ваҡытта! Был нескәлекте белмәгән урыҫтарҙың өйөндә ул ҡоштар бер-ике көндән дә, бер айҙан да тауыш бирмәгәндер. Ә урыҫтар менән һатыулашҡан кеше иһә Сабиттың "бизнес-партнеры" һәм һатыулашыу махсус рәүештә ойошторолған тамаша булған икән. Һуңынан уларҙың "Һабантуйҙа кеше аҡса бөтөрөп ҡайта, ә беҙ, кирһенсә, аҡса эшләп ҡайтып киләбеҙ", тип һөйләүҙәрен күптәр ишеткән.

Бына ошондай күренештәр ҙә осрай өҫтәмә килем алыу мәсьәләһен хәл иткән саҡта. Тик, зинһар, был хәл тураһында һөйләп, автор беҙҙе мутлыҡҡа һөсләтә, тип ҡабул итмәгеҙ. Бындай мутлыҡҡа һәр кем һәләтле түгел. Унан һуң, ундай алдашыуҙарҙың гонаһынан да ҡурҡыу кәрәктер. Һәр хәлдә, өҫтәмә аҡса эшләүҙең юлдары бынан башҡа ла тулып ята тормошта.

**Сәғит УСМАНОВ.**
**Баймаҡ районы.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**Беҙ, өлкәндәр, йәштәрҙән күберәк гәйеп эҙләргә тырышабыҙ. Ә бит улар беҙҙән, өлкән быуындан, ата-әсәһенән өлгө ала. Тимәк, өлкәндәр үҙҙәренең гәйебе өсөн "тупәләй" булып сыға түгелме йәштәрҙе?**

**(Башы 1-се биттә).**

***Әмир СӘЙҒӘФӘРОВ, Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:*** Мәсьәләнең ҡуйылышы менән тулыһынса килешәм. Йәш кешегә, балаға, әлбиттә, өлгө кәрәк. Бәләкәй сағында ниндәйҙер аламалыҡтар күреп йөрөһә, тиҫкәре күренештәр шаһиты булып үҫһә, уның аңы, тормош шулай булырға тейеш икән, тигән ҡалыпҡа һалынасаҡ һәм ул яңылыш, тайғаҡ юлға баҫасаҡ. Бөгөнгө көндә, минеңсә, йәштәргә лайыҡлы өлгө булырҙай кешеләр һирәк. Булһа ла, улар йәштәргә шәхсән таныш түгел, ҡайҙалыр ситтә йәшәй. Ә бит балаларҙың эргәһендә булып, улар менән даими аралашҡан, уларҙы өлгө булырлыҡ ниндәйҙер һоҡланғыс сифаттары менән үҙенә йәлеп иткән кешеләр кәрәк. Ошо хаҡта уйлаһам, һәр ваҡыт беҙгә башланғыс кластарҙа һабаҡ биргән уҡытыусыбыҙ Гөлнур апай Баймырҙина иҫемә төшә. Һуғыш йылдары балаларыбыҙ. Тормош ауыр, аслыҡ, яланғаслыҡ - бөтәһе лә бар. Ҡыш һыуыҡ класта өҫкө кейемдә ултырабыҙ, яҙыу ҡараһы туңа хатта. Шул саҡ Гөлнур апай, әйҙәгеҙ әле, балалар, өшөнөгөҙ бит, килегеҙ яныма, тип эргәһенә саҡырып алыр ҙа, йыр башлар ине. Бергә ултырғас, йылыраҡ та булып китә, йырлағас, күңел дә күтәрелә. Тәнәфестә лә уҡытыусыбыҙ таҡмаҡ әйтеп, бейергә төшөп китә, беҙҙе лә бейетә. Бына шулай бойоғорға бирмәне ул беҙгә. Хәҙер ҡарайым да, ниндәй матур донъя, ә йәштәрҙең бәғзеләре йәшәргә лә, эшләргә лә теләмәй. Әлеге Гөлнур апай кеүек бала күңеленә үтеп инә белгән уҡытыусылар ҙа бик кәрәк бөгөн. Ә иң мөһиме, әлбиттә, ғаилә мөхите тип уйлайым. Баланы киләсәктә дөрөҫ йәшәргә иң тәүҙә ғаиләлә өйрәтә башларға кәрәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды**

*КЕМ АЛЫҠ!*

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"



Бәләбәй районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барғанда**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуябыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ. **Ә ноябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов һәм республикаға визит менән килгән Рәсәй Иҫәп палатаһы рәйесе Сергей Степашин Өфөлә ремонтланған торлаҡ йорттарҙы ҡараны. Баш ҡаланың күп фатирлы йорттарына капиталь ремонт Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фонды бүлгән аҡсалар ярҙамында үткәрелгән. Бөгөнгө көнгә ошо фонд иҫәбенә Өфөлә генә ремонт талап иткән 5500 торлаҡ йорттан 500-ҙән ашыуы йәки 10 проценты ремонтланған.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһында Яңы 2012 йылды байрам итеү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Указ менән Яңы йыл сараларын әҙерләү һәм үткәреү буйынса республика ойоштороу комитеты составы раҫланды.

✓Рәсәй Президенты Хакимиәтенең ҙур залында VI "Йыл рәсәйлеһе" милли премияһын тапшырыу тантанаһы үтте. Саңғы уҙыштары һәм биатлон буйынса дүрт тапҡыр Паралимпия уйындары чемпионы Ирек Зариповҡа спорттағы ҙур ҡаҙаныштары өсөн "Йыл рәсәйлеһе" премияһы бирелде. Башҡортостан спортсыһына премияны Рәсәй Паралимпия комитетының генераль секретары, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, саңғы уҙыштары буйынса Паралимпия уйындары чемпионы Михаил Терентьев тапшырҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәйек, был премия менән күренекле мәҙәниәт һәм сәнғәт, спорт, фән һәм иҡтисад, дәүләт власы эшмәкәрҙәре бүләкләнә.

✓2011 йылдың 11 ноябрендә республикала 726 пар ғаилә ҡорорға теләк белдергән. 214 туй Өфөлә үтәсәк. Был көндө баш ҡаланың район ЗАГС-тарында 30-шар никах теркәләсәк, ә Үҙәк ЗАГС-ҡа 53 ғариза бирелгән. "Ғәҙәттә республика буйынса бер аҙна эсендә 500-600 пар теркәлә. Туй үткәреү өсөн иң "емешле" булған июль һәм август айҙарында аҙнаһына меңгә яҡын пар теркәлә, ә Өфөлә - 300-ҙән ашыу пар", - тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһының ЗАГС идаралығы хеҙмәткәре Ләйсән Абдуллина.

✓Дәүләт теркәүе, кадастр һәм картография федераль хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы яңы онлайн-хеҙмәт тәҡдим итә. Эш көнө дауамында 639-199-788 ICQ-номерына Росреестрҙың республика идаралығы хеҙмәткәрҙәре эшенә ялыу менән мөрәжәғәт итергә йәки ришүәт талап итеүҙәре тураһында хәбәр итергә мөмкин. Был хеҙмәт коррупцияға ҡаршы көрәш планын үтәү маҡсатында индерелгән.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ИЗГЕЛЕК ЭШЛӘ ЛӘ,

## һыуға һал...

**Әйтем тулы килеш шулай яңғырай: "Изгелек эшлә лә, һыуға һал: халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер...". Бында "балыҡ" һүҙе тәү ҡарамаҡҡа "халыҡ"ҡа оноҡшашлыҡ принцибы буйынса рифма өсөн генә алынғанға оҡшаған. Был принцип буйынса ҡарағанда, әйтемдең яңғырашын шулай тип тә үҙгәртергә мөмкин булыр ине, әйтәйек: "Изгелек эшлә лә, урманға ебәр: кеше белер, кеше белмәһә, мышы белер", - тип. Әммә был осраҡта мәғәнә бөтөнләй юҡҡа сыға. Шулай ҙа эшләнгән изгелектең мотлаҡ һыуға һалынырға тейеш булыуында ниндәй мәғәнә-ишара ята һуң? Ошо хаҡта киңерәк планда фекер йөрөтәйек.**



Быйыл яҙ ерҙәр ҡарҙан әрселгәс, ял көндәрендә йәш тә өс айлыҡ ҡыҙым менән ҡала урамына сығып йөрөнөк. "Башҡортостан" сауҙа үҙәге янында балалар уйыны майҙансығында яҙғы ҡояшҡа ҡыҙынырға сыҡҡан төрлө йәштәге башҡа балалар һәм ата-әсәләр менән шау-гөр киләбеҙ. Бер мәл ҡыҙым ҡулындағы печеньеһын шул тирәлә семсенеп йөрөгән күгәрсендәгә ырғытты. "Тыныслыҡ символдары" күҙ асып йомған арала асфальтҡа түшкән тәмлекәсте кисәктәргә бүлгеләп, юҡ итте. Ҡыҙыма тағы ла бер печенье тотторҙом, уныһын да ай күрҙе, ҡояш алды. Ҡоштарҙы ашатыу ҡыҙыма шул тиклем оҡшап ҡалды. Икенсе көнгә беҙ аҙыҡты мулыраҡ алып, шул уҡ урынға сыҡтыҡ. Барып та еттек, беҙҙе кисәге күгәрсендәр тағы ла уратып алды. Ҡыҙым уларҙы көнбағыш, икмәк валсыҡтары менән рәхәтләнеп һыйланы. Уларҙың туйынғанын күреп, ҡыҙым үҙе лә мәҙәк тапты, ҡошсоҡтар емгә алданған арала уларҙы ҡулына эләктерергә лә самаланы. Асфальт өҫтөнә ем төшкән һайын, беҙ асҡан "ыстала-уай" клиенттары ла артты, күгәрсендәрҙән тыш турғайҙар ҙа беҙҙең янға килеп етте. Әйләнә-тирәбеҙ ҡош баҙарына оҡшай башланы бер мәл.

Бер аҙҙан был шөғөлөнән ҡыҙым да ялыға башланы, мине ситкә тартырға тотондо, икенсе урынға барырға өндәне. Беҙ асфальтта туйынған ҡошҡайҙарҙы ҡалдырып, транспортҡа ултырып, ҡаланың башҡа тарафына, башҡа майҙансыҡтарға юлландыҡ. Тик ул урындарҙа ла иркенләп атлап барырмын, тимә. Саҡ ҡына барһаҡ, ҡаршыбыҙҙа өйөр-өйөр йә турғай, йә күгәрсен, йә ҡарға көтөүе килеп төшә лә, беҙгә текәлә. Беҙ уларҙың тәүгеләренә кәҫәбеҙ төбөн ҡырып өлөш сығарҙыҡ, аҙаҡ запасыбыҙ ҡалмағас, үҙҙәрен күрмәмешкә һалышып, үтеп китергә тырыштыҡ. Һе, артыбыҙҙан әйәрә ҡошҡайҙар, күгәрсендәр гөрөлдәп, турғайҙар сырылдап, ҡарғалар ҡаркылдап тәкәтте ҡорота, ашарға таптыра бит малай! Улар шулай тип өндәшкән һымаҡ: "Башҡаларҙы бит ашаттығыҙ, ә беҙҙең өлөш ҡайҙа?"

Йәйгелеккә ауылға ҡайтып киткәнсе дауам итте был хәл. Ҡала урамына сығыуыбыҙ була, ҡошсоҡтар беҙҙең янға өйөлөшә, фыр-фыр осоша башлай. Йәнлектәр, ҡошсоҡтар ашатҡан ергә килә инде ул, бында аптырарлыҡ бер нәмә лә юҡ, тиер берәү. "Мал да ашаған еренә ҡайта", "Йылыға йылан эйәләшә" тигән һүҙҙәр ҙә бар халыҡта. Уныһы шулай, әммә мине бында иң ныҡ аптыратҡаны ҡоштар араһында мәғлүмәттең тиҙ таралыуы ине. Бында аҡыл менән аңлатып булмаҫлыҡ ниндәйҙер хикмәт барлыҡҡа оҡшаған кеүек. Һәм, әлбиттә, беҙ ҡыҙым менән "Башҡортостан" сауҙа үҙәге янында тәүләп ашатҡан ҡоштар: "Ҡошҡайҙар, бер бәләкәй генә Тамсы исемле ҡыҙ бигерәк изгелекле йән икән, ул беҙҙең затты һыйларға ярата",- тигән хәбәрҙе ҡала парктары буйлап осоп таратып йөрөмәгән бит. Тимәк, бында мәғлүмәт бөтөнләй икенсе юл менән таралған булырға тейеш. Тик ниндәй юл менән һуң? Ысынлап та, беҙҙең бер урында ҡоштарға ем биреүебеҙ хаҡындағы хәбәр икенсе урынға нисек барып еткән?

Был һорауға беҙ яуапты гәзиттең 22-се һанында "Ҡош аулаған йәлсемәҫ" тигән әйтем хаҡында һүҙ алып барғанда өлөшләтә бирҙек, буғай. Ҡоштар Аллаһы Тәғәләгә иң тоғро заттар, улар тәүгеләрҙән йәҙ мең тапҡыр Уның исемен иҫкә алып зекер әйтә. Ошондай тоғролого өсөн Аллаһы Тәғәлә уларға Туфан һыуынан ҡотолдорор ҡанат биргән. Тимәк, ҡоштарҙың мәғлүмәт каналы ла бер йышлыҡта урынлашҡан һәм улар Аллаһы Тәғәләгә тоғролоғо өсөн үҙҙәренә ҡағылған һәр бер хәбәргә шундуҡ эйә була ала, тигән фаразға урын ҡала бында. Сағыштырыу өсөн әүлиәләрҙе, сәхәбәләрҙе, бәйғәмбәрҙәрҙе алайыҡ. Улар ҙа үҙҙәренең тоғролого менән Аллаһтың рәхмәтенә өлгәшеп, бер-береһе менән сымһыҙ-ниһеҙ генә аралаша алған. Был турала дини әҙәбиәттә бик күп дәлилдәр бар. Бына бит нисек тора мәсьәлә.

Хәҙер инде башта телгә алған "Изгелек эшлә лә, һыуға һал: халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер" әйтеменә әйләнеп ҡайтайыҡ. Әлбиттә, бында эшләгән изгелеген йылғаға һалып торған кешене күҙ алдына килтереү бик көлкөлө күренеш булып тойолор ине. "Һыуға һал" һүҙбәйләнешенә бик ҙур кинәйә, оло мәғәнә һалынған. Миненсә, ул изгелек атҡарғанда шаһиттар кәрәкмәй, изгелек иҫәпкә ҡоролмай, тигәнде аңлаталыр. Әгәр ҙә изгелек ниндәйҙер ҡайтарма шарт, иҫәп буйынса башҡарылһа, изгелек булыуҙан туҡтай. Тик һыуға һалынған, йәғни ихласлығын, фиҙаҡәрлеген ярҙамында ғына атҡарылған гәмәлең изгелек тип атала. Иҫәп бар урында изгелек тә юҡҡа сыға. Тик ысын йөрәктән башҡарылған изгелек кенә бер ниндәй ҙә маҡсат-иҫәпкә ҡоролмайынса, "һыуға һалына". Аҡсаһын тыҙҙырыусы кеше лә "аҡсамды һыуға һалдым" йәғни "бер ниндәй ҙә файҙаһын күрмәнем" тип белдерә.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, ысын, бер ниндәй ҙә иҫәпкә ҡоролмаған изгелек кемдер тарафынан баһаланыуға ла мохтаж түгел. "Халыҡ белмәһә, балыҡ белер", тиелә шуның өсөн. Ысын батырлыҡ матур хуплауҙарға мохтаж түгел, тип тә әйтәләр тағы. "Мин һиңә изгелек эшләнем, ҡасан миңә яуап бирәһең, изгелек эшләйһең?" тиеп кемгәлер дәғүә белдереп йөрөүсене лә изге кеше тип әйтеп буламы? Юҡ. Был монафиҡлыҡ тип атала.

Хәҙерге заманда эзотерика, биохимия, фотосинтез өлкәләрендә бик күп асыштар яһала. Беҙ шыйыҡса, эсемлек тип кенә күреп өйрәнгән һыуҙың бер тамсыһында ғына, мәсәлән, әллә күпме энергия, мәғлүмәт тупланған һәм һыу бына тигән үткәргес тә. Улай ғына ла түгел һыу алыштырғыһыҙ төҙөлөш материалы: кеше организмының 84, баш мейеһенең 92 проценты һыуҙан торғас, изгелеген "һыуға һалған" кеше бының менән барыбер кешелеккә хеҙмәт итә, йәғни уның был изге гәмәле бушҡа китмәй, Аллаһы Тәғәләнең кешене барлыҡҡа килтергән сеймалға позитив энергия булып һеңә. Ә ҡала буйынса тиҙ арала ҡоштар донъяһында позитив мәғлүмәттең таралыуына килгәндә, бында ла һыу урынын һауа алып торалыр. Ә нимә ул һауа? Һауа - ул кислород, йәғни һыуҙың бер өлөшө.

Беҙ туҡтауһыҙ рәүештә изгелек эшләүсе һәм бының өсөн алмашҡа бер нәмә лә алып һәм һорап өйрәнмәгән халыҡ шул. Тыуған еребеҙгә быуаттар буйына күпме ырыуҙарҙы, айырым халыҡ вәкилдәрен һыйындырғанбыҙ, уларҙы ел-һәләкәттән, гәрәсәт-һуғыштарҙан, суҡындырыуҙан, ҡоллоҡҡа төшөүҙән йолоп алып ҡалғанбыҙ. Изгелек эшләйбеҙ ҙә, һыуға һалабыҙ, изгелек эшләйбеҙ ҙә, һыуға һалабыҙ. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә, сауабына ошо юл менән өлгәшәбеҙ. Беҙгә төрлө дәғүә белдереүҙәргә лә күҙ йомоп ҡарайбыҙ. Ахырыһы, дөрөҫ эшләйбеҙҙәр. Хоҙай беҙҙә шуның өсөн йәшәтә лә инде. Рәхмәтле булған өсөн!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә торлаҡ-коммуналь хужалыҡта финанс ресурстарҙы ҡулланыу һөҙөмтәлелеге, тармаҡты артабан яңыртыу һәм тарифтарҙы көйләү мәсьәләләре тикшерелде. Кәңәшмәлә республика Президенты Рөстәм Хәмитов һәм Рәсәй Иҫәп палатаһы рәйесе Сергей Степашин ҡатнашты. Билдәләнеүенсә, республикала яҡынса бер миллион квадрат метр торлаҡ иҫке һәм авария хәлендә. Капиталь ремонт талап ителгән торлаҡ 22 миллион квадрат метр тәшкил итә. Был Башҡортостан Республикаһы торлаҡ фондының һәр дүртенсе квадрат метры тиерлек.

✓Республикала бер айҙа аҙыҡ-түлеккә 0,5 процентҡа хаҡ артҡан. Статистиктар мәғлүмәттәренә ярашлы, аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған тауарҙарға 0,6 процентҡа хаҡ артҡан, тауар һәм хеҙмәттәр октябрҙә 1,4 процентҡа ҡыйбатланған. Август һәм сентябрҙә статистиктар республикала аҙыҡ-түлеккә хаҡтар төшөүен билдәләгәйне. Бөтә төр тауар һәм хеҙмәттәргә ҡулланыусылар хаҡтары индексы сентябрҙә августҡа ҡарата 99,9 проценты тәшкил итте. Туҡланыу продукттары ул саҡта бер айҙа 1 процентҡа арзанайғайны. Октябрҙәге мәғлүмәттәр буйынса, аҙыҡ-түлеккә бер аҙ хаҡтар күтәрелеүе күҙәтелә.

✓Башҡортостанда йәш ғаиләләргә ярҙам итеү буйынса әүҙем эш алып барыла. Торлаҡ һатып алыу өсөн льготалы кредиттар, бала тыуғанда социаль түләүҙәр һәм субсидиялар биргәндә дәүләт ярҙамы күрһәтелә. Был хаҡта бөгөн "Ижтимағи электрон гәзит" сайтында үткән онлайн-конференцияла Башҡортостан Республикаһының иҡтисади үҫеш министры Евгений Маврин хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, һуңғы ете йылда, йәш ғаиләләргә ярҙам программаһы гәмәлгә ашырыла башлағандан алып, республикалағы 12 мең пар дәүләттән төрлө формала ярҙам алды. Нигеҙҙә был социаль ташламалар. Был маҡсатҡа 1,8 миллиард һум аҡса бүленде.

✓"Өфө" халыҡ-ара аэропорты октябрь айындағы эшенә йомғаҡ яһаны. Үткән ай эсендә 141693 кеше хеҙмәтләндерелгән, был 2010 йылдың октябренә ҡарағанда 14230 кешегә күберәк. Ә йыл башынан Өфө аэропортында 1420679 кеше хеҙмәтләндерелгән, был планға ҡарата 73879 кешегә күберәк. Израилгә даими рейстар яһай башлау октябрь айының мөһим бер ваҡиғаһы булып тора. Өфө - Тель-Авив - Өфө маршруты буйынса рейстар көн һайын башҡарыла. Бынан тыш, Эйлатҡа чартер рейсы ла башҡарыла.

✔ *"Полиция тураһында"ғы законға ярашлы, беҙҙең өҫтән хәҙер контроль да көсәйҙе. Эш артты, ә эш хаҡы шул уҡ кимәлдә ҡалды. Әлбиттә, киләһе йылда уртаса эш хаҡы 35-45 мең һумға етәсәк, тиҙәр.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ПОЛИЦИЯ ЛА...

## беҙҙе яҡлаймы?

**2011 йылда милицияның полиция итеп үҙгәртелеүе ҙур ғына ваҡиға булды. Ошоға бәйле, 10 ноябрҙә Милиция көнө булараҡ билдәләнеп килгән байрам быйыл иһә Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәре көнө тип билдәләнде. Ғөмүмән, исем үҙгәртеүҙән есем үҙгәрҙеме, был өлкәлә ниндәй ҙә булһа үҙгәрештәр бармы? Граждандар үҙҙәрен элеккегә ҡарағанда яклаулыраҡ һәм һаҡлаулыраҡ итеп тоямы? Ошоларҙы асыҡлау маҡсатында бер-нисә полиция хеҙмәткәренә һәм ябай граждандарға мөрәжәғәт иттек.**

**Фәнил ЯЛМЫРҘИН, подполковник, Өфө ҡалаһы:** Эйе, полиция хеҙмәткәрҙәренән милиция инендә булған ҡайһы бер йөкләмәләр алынды һәм оҙаҡ йылдар был өлкәлә эшләгән кешегә быға күнегеп китеүе еңелдән булманы. Шулай уҡ "Полиция тураһында"ғы законға ярашлы, беҙҙең өҫтән хәҙер контроль да көсәйҙе. Эш артты, ә эш хаҡы шул уҡ кимәлдә ҡалды. Әлбиттә, киләһе йылда уртаса эш хаҡы 35-45 мең һумға етәсәк, тиҙәр, тик был һүҙҙәрҙең дөрөҫмө-түгелме икәнлеген күрер өсөн байтаҡ ҡына көтәһе бар бит әле.

**Гөлназ СӘЛИМОВА, өлкән лейтенант, Өфө ҡалаһы:** Яңы танытма алыуҙан һәм үҙем эшләгән эске эштәр бүлегенең тышындағы яҙыуҙың "Милиция"нан "Полиция"ға үҙгәреүенән тыш, бер ниндәй айырма ла күрмәйем. Элек өйгә киске һигеҙ-туғыҙҙарға булһа ла ҡайтып етә инек, хәҙер иһә төнгә ун икеһеҙ ҡайтып китеүҙе күҙ алдына ла килтереп булмай, сөнки һәр эштең үҙ ваҡыты бар һәм нисек булһа ла шул ваҡытҡа тапшырырға кәрәк. Мәҫәлән, элек беҙҙең бүлектә 10 кеше эшләһә, бөгөнгө көндә 6 кешегә тороп ҡалдыҡ, ә тәртип боҙоусылар бит "милиция хеҙмәткәрҙәре ҡыҫҡартылды" тип эш боҙоуҙарҙы кәметмәне. Тик нимә булһа ла барыһы ла һәйбәткә, тигән фекерҙән сығып эш иткәндә, был үҙгәрештәрҙең дә ыңғай яҡтары күп булыр, тип ышанғы килә.

**Азамат АБДРАХМАНОВ, аспирант:** "Полиция тураһында" закон ҡабул ителгәндән һуң полиция хеҙмәткәрҙәре халыҡҡа яҡынайҙы, тип әйтергә була. Мәҫәлән, элек кемгәләр мөрәжәғәт иткәндә милиция хеҙмәткәре үҙенең исем-шәрифен, вазифаһын әйтеү-әйтмәүҙе үҙе хәл итһә, хәҙер ул быны эшләргә закон буйынса бурыслы. Әлбиттә, исем үҙгәреүҙән Эске эштәр министрлығының эшендә ниндәйҙер глобаль үҙгәрештәр булыуын көтөү, минеңсә, ахмаҡлыҡ булыр ине. Был үҙгәрештәр була ҡалһа ла, һөҙөмтәһен бер-нисә йыл көтөргә кәрәктер ул. Үҙемә килгәндә инде, полиция хеҙмәткәрҙәре менән бәйләнешкә инергә тырышмайым һәм үҙемде яҡларҙай закондарҙы өйрәнеп барырға тырышам.

**Сәлиә МАННАПОВА, һатыусы:** Полиция хеҙмәткәрҙәре араһында дуҫтарым бик күп. Барыһы ла аҡыллы, уңған, эшһөйәр кешеләр. Был профессияла үҙ эштәренә мөкиббән киткән кешеләр генә эшләй алалыр ул, тип уйлайым, сөнки эштәренең ниндәй ауыр икәнлеген күреп торам. Донъяла төрлө ҡарашлы кеше йәшәй. Полицияға кире ҡараштағы булыусыларҙың да, ыңғай ҡараусыларҙың да һаны күп, тик ниндәйҙер хәүефкә осраған саҡта тәү сиратта нәҡ уларға йүгереп барыуыбыҙҙы иҫтән сығармайыҡ. Алыҙ-ялһыҙ, байрамһыҙ тигәндәй, халыҡты төрлө бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаусы һәм яҡлаусы полиция хеҙмәткәрҙәренә түҙемлек һәм эштәрендә уңыштар теләйем.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺУНАРСЫ БИЛЕТЫН АЛЫШТЫР

**БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы һунарсы билеттарын алмаштырыу һәм берҙәм федераль өлгөләгә билеттар биреүҙе дауам итә.**

Иҫке, шулай ҙа һаман ғәмәлдә булған һунарсы билеттарын киләһе йылдың 1 июленә тиклем алмаштырырға кәрәк. Кире осраҡта һунарсы һунар ҡағиҙәләрен боҙоусы тип иҫәпләнә һәм уны Рәсәй Федерацияһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына ярашлы яза көтә.

- Берҙәм федераль өлгөләге һунарсы билетының мөҙҙәте сикләнмәгән һәм уны бөтә ил территорияһында ҡулланырға мөмкин. Билеттарҙы алмаштырыу һәм яңыһын алыу процесында һунарсылар тураһындағы мәғлүмәт берҙәм дәүләт һунарсылыҡ хужалығы реестрына индереләсәк. Был тәбәктәге һунарсыларҙың аныҡ иҫәбен алырға мөмкинлек бирәсәк. Һунарсы билеттарын алмаштырыу һәм яңыларын биреү бушлай башҡарыла, - ти Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы матбуғат секретары Нина Никандрова. Билеттар алыу, алмаштырыу һәм ғәмәлдән сығарыуға бәйле бөтә һорауҙар буйынса (347) 272-83-68, 273-96-32 телефондары аша министрлыктың Йәнлектәр донъяһын һаҡлау буйынса идаралығына мөрәжәғәт итергә кәрәк

# ӨФӨЛӘ ЙӘШӘҮЕ УҢАЙЛЫ

**"Урбаника" территориаль планлаштырыу институты үткәргән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре буйынса, Рәсәйҙең йәшәү өсөн уңай булған ҡалалары рейтингы билдәләнде.**

Рәсәйҙең уртаса статистик граждансы ихтыяжына йүнәлтелгән булыуы уның төп үҙенсәлеге булып тора, шуға күрә "хаҡ/сифат" күрһәткесе ҡаланың рейтингтағы урынын билдәләүсе төп параметр булды. Асыҡланыуынса, был критерий буйынса Мәскәү миллиондан ашыу халҡы булған тәүге өс ҡала иҫәбенә инмәгән. Тәүге өс урынды үҙ-ара Санкт-Петербург, Өфө һәм Новосибирск бүлеште. Ә Рәсәйҙең ин-иң яҡшы ҡалаһы тип Сургут танылды."Урбаника" институты версияһы буйынса, Рәсәйҙең йәшәү өсөн иң уңайлы тәүге ун ҡалаһы иҫәбенә киләһеләр ингән: Сургут, Төмән, Краснодар, Нижневартовск, Санкт-Петербург, Өфө, Старый Оскол, Новосибирск, Мәскәү, Мурманск.

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫ ЭШКӘ АЛМАЙҘАР

**Республикала ир-егеттәргә ҡарағанда ҡатын-ҡыҙға эш табыуы ауырыраҡ. Ә эш биреүселәрҙең яртыһы ғына хеҙмәткәренә 10 меңдән артыҡ эш хаҡы түләргә әҙер.**

Росстат мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда эшһеҙлек 7,6 процент тәшкил итеп, былтырғы йылға ҡарағанда 1,6 процентҡа әҙерәк булһа ла, эш баҙарында хәлдәр яҡшыға үҙгәрмәй. Хөкүмәт вице-премьеры Фидус Ямалетдинов белдереүенсә, быйыл эшкә урынлашыу менән хәлдәр ҡырҡыулашҡан. Былтыр 71,2 процент эшһеҙ үҙенә эш урыны тапһа, быйыл иһә был һан - 69,9 процент ҡына тәшкил итә. Мәҫәлән, ҡайһы бер районда бер эш урынына 10 эш эҙләүсе дәғүә итә. Бындай хәл башлыса Ағиҙел ҡалаһында, Иглин һәм Әбйәлил районында күҙәтелә.

- Күпселек вакансиялар ир-егеттәр ҡулы талап иткән (83 процент) эшсе профессиялар, - ти премьер-министр урынбаҫары. Шул уҡ ваҡытта эшһеҙҙәрҙең 57 проценты - ҡатын-ҡыҙҙар. Шулай уҡ юғары һәм махсус урта белеме булған урта быуын етәкселәргә - менеджерҙарға ла эш урыны табыу ауыр, ә шул уҡ ваҡытта ауыл хужалығында йәки төҙөлөштә эшләргә теләүселәр юҡ тиерлек.

Тәҡдим ителгән вакансияларҙың яртыһы тиерлек ваҡытлыса эш урыны тәҡдим итә. Эш биреүселәр күп осраҡта аҙ эш хаҡы һәм насар эш шарттары тәҡдим итә. Мәҫәлән, 2011 йылда эш урындары тәҡдим иткән эш биреүселәр 10 мең һумдан юғары эш хаҡы менән тәьмин итергә әҙер, ә 20 меңдән ашыу эш хаҡын бары тик 15 процент эш биреүсе генә түләй ала.

# АСПИРАНТТАР ӘРМЕГӘ КИТӘМЕ?

**Бөгөнгө көнгә бер нисә тиҫтә буласаҡ фән кандидаттары ҡулдарына әрмегә саҡырыу ҡағыҙы алған да инде.**

Әгәр ҙә медицина комиссияһы уларҙы әрме хеҙмәтенә яраҡлы тип тапһа, уларға бер йылға уҡыу хаҡында онотоорға тура киләсәк. Шул уҡ ваҡытта Оборона министры аспиранттарҙы, уҡып бөтмәйенсә, әрме сафына алмай торорға тәҡдим иткәйне. Шулай итеп, теймәҫкә һүҙ бирҙеләр, ә шул уҡ ваҡытта саҡырыу ҡағыҙы тотторалар. Был хәлдә нисек аңлатырға?

Ә эш бына нимәлә. Әрмелә хеҙмәт итеүҙән кисектереүгә тик аккредитацияланған юғары уҡыу йорто аспиранттары ғына эйә. Быйыл юғары уҡыу йорттары үҙендәге һәр һөнәр буйынса яңы аккредитация үтергә тейеш, ә БДУ-ла ғына, мәҫәлән, уларҙың һаны - 64. Тик әлегәсә бер юғары уҡыу йорто ла аккредитация үтмәгән, шуға күрә, формаль рәүештә, буласаҡ фән кандидаттарын әрме сафына саҡырырға мөмкиндәр. Шуға күрә буласаҡ һәм әлеге аспиранттарҙың яҙмышы хәрби врач комиссиялары ҡарамағында. "Борсолорға кәрәкмәй, - тип тынысландыра республика хәрби комиссары Анатолий Балтинский. - Саҡырыу ҡағыҙы килеүе уларҙың хәҙер уҡ хеҙмәт итергә китеүҙәрен аңлатмай әле. Улар күрһәтелгән ваҡытҡа килеп, хәрби һәм медицина комиссияһы үтергә тейеш һәм аспирантурала уҡыуҙары хаҡында документ алып килергә бурыслы, шул ваҡытта аспиранттар ваҡытлыса кисектереү мөмкинлеге менән файҙалана аласаҡ".

# КИТАП САУҘАҺЫ - АУЫЛДАРҘА

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә сыҡҡан күп китаптар республикабыҙ районларында, ауылдарҙа йәшәүселәргә барып етмәүгә зарланалар. Шуны күҙ уңында тотоп, нәшриәт 12-16 ноябрь көндәрендә республикабыҙҙың көньяк-көнсығыш ҡала һәм районлары буйлап көҙгө күргәҙмә-сауҙа ойоштора...**

Республика халҡына нәшриәттә сыҡҡан өр-яңы китаптар, шул иҫәптән башҡорт телендә нәшер ителгән мосолман баҫмалары, башҡорт халҡының этнографияһына, тарихына ҡағылышлы хеҙмәттәр тәҡдим ителәсәк. Данлыҡлы сәнғәт әһелдәренә, билдәле яҙыусыларға арнап сығарылған фотоальбомдар, кескәйҙәр өсөн сағыу һүрәтле, фәһемле йөкмәткеле баҫмалар, плакаттар һәм уҡыу-методик әсбаптар ҙа үҙ уҡыусыларын табыр, моғайын. Китап сауҙаһы 12-16 ноябрь көндәрендә Хәйбулла, Баймаҡ, Бөрйән, Әбйәлил, Белорет районлардарында үтәсәк. Тулыраҡ мәғлүмәт район гәзиттәрендә баҫылаcаҡ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Башҡорт дәүләт университетында йола буйынса Мәҙәниәт көндәре үтә. Сара сиктәрендә был аҙнала өс сара үтәсәк. 12 ноябрҙә Конгресс-холда "Ирәндек" халыҡ бейеү ансамбленең юбилей концерты, 17 ноябрҙә вуздың төп корпусында - "Мин, һин, ул - бергә тоташ бер ил" фотокүргәҙмәһе асыласаҡ. 18 ноябрҙә йыйылыштар залында студенттар "Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?" уйынында көс һынашасаҡ. 22 ноябрҙә университеттың ижади коллективтары хәҙерге заман сәнғәте фестивалендә ҡатнашасаҡ. "Мәҙәниәт көндәре-2011" БашДУ студенттары менән ойоштолған "Яңы йондоҙҙар ҡабынһын, элеккеләре - һүнмәһен" клубының юбилей кисәһе менән тамамланасаҡ. Кисә 25 ноябрҙә үтәсәк.

✔17-19 ноябрҙә Өфөлә "Йософ уҡыуҙары-2011" Халыҡ-ара фәнни конференция үтәсәк. Уны БР Хөкүмәте, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге, Башҡортостан Фәндәр академияһы ойоштора.

✔Әле Өфөлә рәсми рәүештә теркәлгән туғыҙ мең самаһы эшһеҙ иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта ҡала вакансиялар иҫәбе әлеге ваҡытта 13 мең тирәһе тәшкил итә. Октябрь аҙағындағы күрһәткестәр менән сағыштырғанда, Өфөнөң хеҙмәт баҙарында көсөргәнешлек коэффициенты, йәғни эшһеҙҙәр менән вакансиялар иҫәбенең нисбәте бер аҙ арткан һәм әлегә 0,73-кә тиң.

✔РФ Үҙәк һайлау комиссияһында һайлаусылар менән бәйләнеш өсөн Йәмәғәт "ҡыҙыу линия"һының үҙәк пункты эшләй башланы, тип хәбәр итә Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһының матбуғат хеҙмәте. "Ҡыҙыу линия" РФ Йәмәғәт палатаһы ярҙамында Рәсәй иркле һайлауҙар фонды менән булдырылған. "Ҡыҙыу линияның" бушлай федераль номеры - 8(800)505-47-21.

✔Өфөлә һуңғы биш йылда халыҡ үлеме күрһәткесе 4,8 процентҡа кәмегән. Был хаҡта баш ҡала округы башлығы эргәһендә үткән оператив кәңәшмәлә Роспотребнадзорҙың БР буйынса идаралығы етәксеһе Нәсимә Күсемова хәбәр итте. Уның әйтеүенсә, ҡалала демографик хәлдәрҙең яҡшырыуына өсөнсө йыл рәттән күҙәтелгән тыуым артыуы ла йоғонто яһай. Был арала халыҡтың тәбиғи артыуы Өфөлә ун мең кешегә 21 кеше тәшкил итә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КЕМГӘ-КЕМГӘ...

## ҡатын-ҡыҙға ауырырға ярамай

**Башҡортостанда 1- 29 октябрҙә ҡатын-ҡыҙҙарға маммографик тикшеренеүҙәр үткәрелде. Һөт биҙҙәре ауырыуҙарын иҫкәртеү һәм иртәрәк диагностикалау буйынса бындай күләмле сара төбәктең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән Өфөлә 15-16 ноябрҙә үтәсәк Бөтә Рәсәй Әсәләр форумы алдынан үткәрелде.**



Акция сиктәрендә белгестәр йәмғеһе 22014 ҡатын-ҡыҙға консультация биргән, шуларҙың 12493-ө медицина күрһәтмәләре буйынса маммография үткән. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса 4578 ҡатында төрлө патология табылған, шул иҫәптән: 3473 осраҡта - мастопатия, 305 осраҡта фиброаденома булыуы асыҡланған. Был ҡатын-ҡыҙҙар өҫтәмә консультациянан һуң белгестәр күҙәтеүе аҫтына алынған, 786-һы диагнозды асыҡлау өсөн өҫтәмә тикшереүгә ебәрелгән. 15 октябрҙә ошо уҡ акция сиктәрендә 1-се Республика клиник онкология диспансеры поликлиникаһы онкомаммологтары менән һөт биҙҙәре ауырыуҙарын иҫкәртеүгә арналған Асыҡ ишектәр көнө үткәрелгән. Көн дауамында 110 ҡатын-ҡыҙ консультация алған, шуларҙың 56-һына асыҡланған патология буйынса рекомендациялар бирелгән. Яман шештәр табылмаған.

БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, һөт биҙҙәре рагы - ҡатын-ҡыҙҙар араһында иң ныҡ таралған яман шеш ауырыуы. Онкология сирҙәре структураһында был локализация беренсе урында килә. Донъяла йылына һөт биҙҙәре яман шешенең 1 млн осрағы теркәлә. Йыл һайын ул 5-6 процентҡа арта бара. Рәсәйҙә ауырый башлағандарҙың 60 процентында был патология - I-II стадияла, ә 40 процентында III-IV стадияла асыҡланған. Иң күп ауырыусылар һәм сирҙең артыуы 55 - 69 йәшлектәр төркөмөндә теркәлгән. Һөт биҙҙәренең яман шеше ҡатын-ҡыҙҙарҙың онкологиянан үлеүенең төп сәбәбе булып тора.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ИНТЕРНЕТ АША ҒЫНА...

## йомоштарыңды йомошла

**Хәҙерге заманда ваҡыт тарлығы айырыуса ныҡ һиҙелә. Бигерәк тә йомош менән ҡалаға килеүселәргә эштәрен үтә ҡабалан рәүештә башҡарырға тура килә. Төрлө документтар әҙерләп алыр өсөн дә оҙон сиратта торорға кәрәк.**

Әммә хәҙер халыҡ өсөн был йәһәттән бер ни тиклем уңайлыраҡ буласаҡ. Интернет селтәре аша һәр кем теләгән ваҡытта документтар әҙерләүгә ғариза ҡалдыра ала. Һәр гражданға дәүләт хеҙмәтенең электрон порталында (w.w.w.gosuslugi.ru) теркәлергә мөмкин.

Электрон ғаризаны тапшырыу сайтта теркәлеүҙән һәм "шәхси кабинет" булдырыуҙан башлана. Быының өсөн пенсия страховкаһы тураһындағы танытмаһының (СНИЛС) һәм һалым түләүсенең шәхси номерҙарын (ИНН) индерергә кәрәк. Теркәлгәндән һуң ике аҙна үткәс, ғариза биреүсенең почта адресына шәхси кабинет өсөн логин һәм пароль күрһәтелгән хат киләсәк. Улар ярҙамында һеҙҙең өсөн электрон хеҙмәтләндереү асыласаҡ.

Кәрәкле документ әҙерләү порталдың сайтында күрһәтелгән анкетаны тултырыуҙан башлана. Шунда уҡ шәхси фотоғыҙ кәрәк буласаҡ. Мөрәжәғәтегеҙҙе үтәүҙәрен үҙегеҙ күҙәтеп бара алаһығыҙ. Документығыҙ әҙер булһа, һеҙгә саҡырыу киләсәк. Электрон рәүештә ғариза яҙып, мәсәлән, паспортты алыштырырға була. Ул ваҡытта миграция хеҙмәтенә ике тапҡыр түгел, бер барыу ҙа етә.

Анкета тултырғанда иғтибарлы булырға, тулы мәғлүмәт бирергә кәрәк. Ғәҙәттә, һуңғы ун йыл эсендә үтелгән хеҙмәт юлы, персональ белешмәләр, әрме хеҙмәте тураһындағы мәғлүмәт күрһәтелмәй. Был иң таралған хаталарҙың береһе. Анкетала шулай уҡ телефон һандарын күрһәтергә онотмағыҙ.

**Ғәлиә ХӘБИӘХМӘТОВА,**
**Федераль миграция хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы хеҙмәткәре.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең опекунлыҡ һәм попечителлек буйынса идаралығының сайтында "Ҡабул итеүгә яҙылыу" махсус бүлексәһе ғәмәлгә инде. Ғаилә мәсьәләләренә ҡағылышлы һорауҙары булған граждандар хәҙер белгес менән осрашыуҙы үҙенә уңайлы булған ваҡытҡа билдәләй ала. Идаралыҡҡа килгәс тә, сиратта торорға кәрәк булмаясаҡ. Ҡабул итеүгә түбәндәге электрон адрес аша яҙылырға була: http://opekaufa.ru**

ҺОРАУ - ЯУАП

### ВӘКӘЛӘТЛЕГЕ ЮҠ

**Минең баҡса участкама хакимиәт вәкилдәренән торған комиссия тикшереү менән килде. Улар мине баҡса төҙөлөшө майҙанын боҙоуҙа гәйепләйҙәр, штраф түләтмәкселәр. Был законға ярашлымы?**

- Хакимиәт вәкилдәренән торған комиссияның ер закондарын боҙған өсөн граждандарҙы административ яуаплылыҡҡа тарттырырға хоҡуғы юҡ. Быны фәҡәт вәкәләтле орган - Дәүләт ер контролен башҡарыусы Росреестр ғына эшләй ала. Тикшереү мәғлүмәттәре нигеҙендә ул протокол, унан ҡарар яҙып бирә. Шуға күрә тап ошо ҡарарға суд аша дәғүә белдерә алаһығыҙ, ә протоколға ла, актҡа ла түгел, сөнки былары милексе булараҡ, һеҙгә ҡарата бер ниндәй ҙә власть талаптары була алмай.

### МАХСУС ЛАБОРАТОРИЯ АСЫҠЛАЙ

**Компьютерҙа эшләү зарарлы эш шарттарының береһе булып иҫәпләнәме? Дөрөҫөн әйткәндә, мин унда көнө буйына эшләйем. Бындай урындарҙа эшләүселәргә өҫтәмә рәүештә 6 көнлөк отпуск бирелә, тип ишеттем.**

- Дөрөҫөн әйткәндә, компьютерҙа эшләү зыянлы эш категорияһына инмәй, ләкин бәхәсле осраҡтарҙа был мәсьәлә эш урындарын аттестациялау аша (эш урыны зарарлымы икәнен ошо сара ғына асыҡлай ала) хәл итергә мөмкин.

Электр-магнит нурланыу, яҡтыртылыш һәм башҡа шундай шарттарҙы үлсәмдәр ярҙамында асыҡлаусы махсус лабораториялар бар. Бындай аттестация эш биреүсе иҫәбенә башҡарыла. Әгәр эш урыны зарарлы тип табылһа, компенсация мәсьәләһе хәл ителә: бушлай һөт йәки өҫтәмә отпуск, өҫтәмә түләү бирелә.

### ЯУАПЛЫЛЫҠ АЛМАЙ

**Әхирәтемдең ирен төрмәгә ултырттылар. Бынан алда ул кредитҡа ике телефон һатып алған булған. Хәҙер минең әхирәтемә банктан иренең бурысын түләүҙе талап итеп туктауһыҙ шылтыраталар, судҡа биреү менән янайҙар. Уға ни эшләргә?**

Әгәр ҙә гражданлыҡта йәшәгән ҡатыны ире кредит килешеүе төҙөгәндә ышаныслың булмаған хәлдә ул иренең ғәмәлдәре өсөн үҙ өҫтөнә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ алмай.

Бындай хәлдәрҙә банк хеҙмәткәрҙәре, ысынлап та, йыш ҡына бурыслының туғандарын, яҡындарын төрлөсә ҡурҡытып, түләүҙе талап итә. Әгәр улар артабан да янауҙарын туктатмаһа, ғариза менән полицияға мөрәжәғәт итегеҙ.

### ДӘҮЛӘТ ЯРҘАМЫ ТОС БУЛМАҪСЫ

**Тәрбиәгә бала алыусыларға пособие күләме арта, тигән хәбәр ҡолағыма салынып ҡалғайны. Дөрөҫ булдымы был?**

- Эйе, тәрбиәгә бала алыусыларға пособие 420 һумға күберәк түләнәсәк. Тиҙҙән ай һайын түләнә торған пособие 5500 һум тәшкил итәсәк. Бөгөн уның күләме - 5080 һум. Ошо көндәрҙә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Социаль сәйәсәт һәм һаулыҡ һаҡлау комитеты ултырышында шундай закон проектын ҡараны. Республика Хөкүмәте тәрбиәгә бала алыусыларға пособие күләмен арттырыу тураһында тәҡдим индергән. "Тәрбиәгә бала алыусы ата-әсәләргә һәм ғаиләләргә тәғәйенләнгән социаль ярҙам тураһында" һәм "Башҡортостан Республикаһында патронат тәрбиә тураһында" республика закондарына үҙгәрештәр индереләсәк. Закон проектында, пособиелар 2011 йылдың 1 ғинуарынан арттырыла, тиелә. Тимәк, ул ҡабул ителгәс, патронат ғаиләләргә һәм тәрбиәгә бала алған ата-әсәләргә яңынан иҫәпләүҙәр үткәреләсәк һәм 2011 йыл өсөн тейешле сумма ҡайтарыласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Үҙәк көйөү



Яңы ғына һығылған картуф һуты ашҡаҙан һуты әселеген нормаға килтерә, шунда уҡ үҙәк көйөүен бөтөрә. Картуф һутын көнөнә өс тапҡыр, ашар алдынан 50-шәр мг эсәләр. Мөмкинлек булһа, картуфтың төрлө сорттарын ҡулланығыҙ. Шулай уҡ ҡылыҡ үлән (аир) тамыры яҡшы ярҙам итә. 6-10 борсаҡ сәйнәгеҙ ҙә үҙәк көйөүенән ярҙам итә.

### Быу ҙа дауа

Ҡурылдай, туберкулез, ангина, һыуыҡ тейеү, киҙеү, фарингитты дауалау өсөн түбәндәге ингаляцияны ҡулланығыҙ. 60 грамм прополис менән 40 грамм балауыҙҙы эмалле һауытҡа һалып, һыулы кәстрүлгә ҡуйығыҙ. Һыуҙы ҡайнау хәленә килтерергә кәрәк. Быу күтәрелә башлау менән 10-15 минут ингаляция эшләргә. Дауаны иртән һәм кисен 10-15 көн дауам итергә.

### Йәшел сәй

Борондан йәшел сәйҙе дизентерия һәм ҡорһаҡ тифын дауалау өсөн ҡулланғандар. Ҡаты итеп бешерелгән йәшел сәйҙе ашҡаҙан-эсәк трактына һәм баш мейеһенә ҡан һауыу ваҡытында, капиллярҙар шартлаған мәлдә лә файҙаланғандар. Был эсемлек бөйөр ҡыуығында, бөйөрҙәрҙә, бауырҙа таш барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай, шулай уҡ тиреңең функцияларын әүҙемләштерә, тир бүленеп сығыуҙы көсәйтә, күҙәнәктәрҙе таҙарта. Әммә йәшел сәйҙең бөйөрҙәр аша шыйыҡлыҡ сығыуҙы тоткарлауын да онотмағыҙ.

### Йоҡлай алмаһағыҙ

1 ҡалаҡ балды бер стакан йылы һыуға болғатып, йоҡлар алдынан 1-2 сәғәт алда эсһәгеҙ, тиҙерәк йоҡлап та китәсәкһегеҙ, йоҡоғоҙ ҙа туясаҡ. Бал эсәктәр эшмәкәрлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Йоҡлар алдынан ярты сәғәт алда майһыҙ ҡыҙҙырылған аҡ әнис (тмин) орлоҡтарын сәйнәгеҙ. Был тәмләткес йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланғанда ярҙам итә.

### Теш ите

Теш ите ауырыуҙары ваҡытында ҙур булмаған сей картуф сәйнәгеҙ. Ошо ысул менән электән ауыҙ ҡыуышлығы ауырыуҙарынан һәм зәңгенән ҡотолғандар.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Ялҡынлы телмәре менән 16 йәшлек ҡыҙ үҙен башҡорт милләтенең ысын патриоты, үҙе тарафынан "Милләт әсәһе" тип нарыҡланған ҡатын-ҡыҙҙың тиң хоҡуҡлылығы өсөн көрәшеүсе тип таныта.*

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

**1919 йылдың мартында ике яҡлы "Үҙәк совет власының Башҡортостан хөкүмәте менән Совет Автономиялы Башҡортостан тураһында килешеүе" төҙөлгәндән һуң үҙҙәрен һуңғы һулышҡаса Башҡортостандың үҫеше, үҙаллылығы, сәскә атыуы өсөн көрәшеүгә арнаған шәхестәребеҙ араһында Рабиға Янғол ҡыҙы Йомағолова (Ҡушаева) ла бар.**



# МИЛЛӘТ ӘСӘҺЕ,

## йәки Рабиға Ҡушаева тураһында бер кәлимә һүҙ

Рабиға Йомағолова 1901 йылда Һамар губернаһы Пугачев өйәҙенең Имәләй олоҫондағы Хәсән ауылында бай башҡорт старшинаһы ғаиләһендә донъяға килә. Атаһы балаларын уҡытыусылар саҡыртып уҡыта, шуға ла ул яҡшы белем ала. Әммә ҡыҙҙың алдынғы ҡарашлы шәхес булып формалашыуында атаһының Харис һәм Ғиләж тигән ағалары - Һамар губернаһында, Башҡортостанда барған революцион ваҡиғаларҙың әүҙем ҡатнашыусылары, һуңынан башҡорт милли хәрәкәтенең билдәле эшмәкәрҙәре - йоғонто яһай.

Бәләкәй сағынан уҡ Рабиға етдилеге, уйсанлығы менән башҡа тиҫтерҙәренән айырылып тора. Шул ваҡытта уҡ ул тормоштоң ғәҙелһеҙлеге хаҡында, ни өсөн минең менән бер ауылда йәшәүсе күп балалар белем алыу бәхетенән мәхрүм, тип уйлана, шул һорауҙы уҡытыусыларына ла биреп, уларҙы уңайһыҙ хәлгә ҡуя. Кешеләр араһындағы айырмалыҡты күреп, Рабиға үҫкәс уҡытыусы булырға һәм балаларҙы белем серҙәренә төшөндөрөргә ҡарар итә. 1916 йылда һеңлеһенең хыялы тураһында белгән Ғиләж ағаһы күрше Бөрйән ауылында уҡытыусы талап ителеүе тураһында хәбәр алып килә. Рабиға шунда уҡытыусы булып барырға ҡарар итә һәм, атаһының ҡаршы килеүенә ҡарамаҫтан, 15 йәшендә тыуған өйөнән сығып китеп, уҡытыусы булып эшләй башлай. Ауыл халҡы йәш уҡытыусыны йомшаҡлығы, кеше хәленә инә белеүе, изгелеге, иғтибарлылығы, хәстәрлеге өсөн ярата һәм 1917 йылдың июлендә Ырымбурҙа үтәсәк башҡорттарҙың Беренсе съезына делегат итеп һайлай. Сарала дәүләт ҡоролошо һәм идара итеү мәсьәләләренән тыш, мәғариф, ер, ғәскәр ойоштороу, һуғышҡа мөнәсәбәт һәм башҡа һорауҙар күтәрелә. Улар араһында ҡатын-ҡыҙға ҡағылышлы мәсьәләләрҙе ҡарау айырым урын алып тора.

Ҡарар тексында шундай юлдар бар: "Сәйәси һәм граждандар хоҡуҡтарында ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы, шәриғәт һәм ғаилә тәртибе - Диниә назараты ҡарамағында. Хәҙерге осорҙо күҙ уңында тотоп, ҡатын-ҡыҙҙар ижтимағи һәм сәйәси ҡоролошта ҡатнашырға бурыслы, ҡатын-ҡыҙҙар араһында һайлау һәм башҡа йәмәғәтселек сараларында ҡатнашыу мәсьәләләре буйынса эшмәкәрлекте тәьмин итеү йәһәтенән съезд Башҡортостан үҙәк шураһының бер өлөшөн (подотдел) урындарға ҡатын-ҡыҙ белгестәрҙе ебәреп, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ғәмәлдәге хәл-торошҡа әҙерләү һәм үҫеп килеүсе ҡыҙҙарҙы тәрбиәләү өсөн махсус мәктәптәр төҙөүгә етди тотоноу маҡсатын ҡуя".

Ҡарарға был юлдарҙы индереүгә Рабиғаның ныҡышмалылығы булышлыҡ итә лә инде. Тәүҙә съездың эшендә "ҡатын-ҡыҙ" мәсьәләһе ҡаралырға тейеш булмай. 16 йәшлек Рабиға ойоштороу комитетына мөрәжәғәт итеп, был һорауҙы фекер алышыуға сығарыуға һәм тейешле ҡарар ҡабул итеүгә өлгәшә.

Сара 1917 йылдың 20 июлендә Каруанһарайҙа асыла. Бер ни тиклем мәсьәлә буйынса ҡыҙыу фекер алышҡандан һуң Йомағолованың сығышын иғлан итәләр һәм трибунанан Рабиғаның тауышы яңғырай. Ул, әсенеп, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында ул берҙән-бер делегат булыуын билдәләй. Бының сәбәбен ул ҡатын-ҡыҙҙарҙың бөтөнләй хоҡуҡһыҙ булыуында, уларҙың грамотаһыҙлығында, баҫылғанлығында һәм томаналығында күрә. Артабан ул шундай талаптар ҡуя: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ирҙәр менән бер тигеҙ тулы гражданлыҡ һәм сәйәси хоҡуҡтар бирергә. Уларҙы хәл итеү өсөн аныҡ саралар тәҡдим итә:

1. Шәриғәт буйынса ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар тиң хоҡуҡлы.
2. Шәриғәт буйынса ҡатын-ҡыҙ сәйәсәт һәм йәмәғәт эштәрендә ҡатнашырға хоҡуҡлы, шуға күрә улар һайлауҙарҙа ҡатнаша ала.
3. Бары тик ҡатын-ҡыҙҙары тиң хоҡуҡлы булған милләт кенә көслө. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың тиң хоҡуҡлылығына бары тик улар үҙҙәре был туралағы закон ҡабул итеүҙә туранан-тура ҡатнашҡанда ғына өлгәшергә мөмкин. Ҡатын-ҡыҙҙар Ойоштороу йыйылышына һайлана ала.
4. Шәриғәттә ҡатын-ҡыҙҙың үҙ-үҙенә бикләнгәнлеге хаҡында һүҙ юҡ. Һайлауҙар улар өсөн яңылыҡ. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың һайлау ғәҙәте булмау һәм ир-аттың ҡатын-ҡыҙҙың һайлау участкаларына килеүенә ҡаршы булыу ихтималлығын күҙ уңында тотоп, халыҡтың яртыһын тәшкил иткән ҡатын-ҡыҙҙың һайлау тауышы юғалмаһын өсөн Ойоштороу йыйылышына һайлауҙарҙа ҡатнашыуын уларҙың бурысы итеп иҫәпләргә. Ҡатын-ҡыҙҙар тауыш бирһен өсөн ир-аттан айырым урындар эшләнергә тейеш.
5. Никах егет менән ҡыҙҙың ризалығынан тыш уҡылғанға, һөҙөмтәлә ғаиләләрҙәге аңлашылмаусанлыҡтар тыуыуын, был ғаиләләрҙә бәхетһеҙ балалар үҫеүен иҫәпкә алып, артабан никах егет менән ҡыҙ ҡатнашлығында уҡылырға тейеш.
6. Ғаилә тормошонда гармония булмау сәбәпле, айырылырға теләгән ҡатындарын ир-ат бик йыш мәжбүр итеп тота. Ҡатын-ҡыҙҙың хоҡуғын тәьмин итеү һәм киләсәк быуынды тәрбиәләүҙе яҡшыртыу маҡсатында никах теркәү кенәгәһенә, әгәр бергә йәшәү мөмкин булмағанда, ҡатын-ҡыҙҙың иренән айырылыу хоҡуғы яҙылырға тейеш.
7. 17 йәшкә етмәгән ҡыҙҙарҙы йәрәшеүҙе йәки кейәүгә биреүҙе тыйырға.
8. Йыш ҡына ҡатын-ҡыҙ төрлө сәбәптәр арҡаһында фәхешханаларға барырға мәжбүр. Һуңынан, китәм, тигәндә лә, улар ғәмәлдәге ҡанундар ҡуйған төрлө ҡаршылыҡтарға осрай һәм ғүмерлеккә бәхетһеҙ булып ҡала. Шуға күрә фәхешханалар тыйылырға һәм уларҙы тотоу рөхсәт ителгән ҡанундар бөтөрөлөргә тейеш.
9. Кешелеклек һәм ғәҙеллеккә ҡаршы килеү сәбәпле, күп ҡатынлылыҡ ҡәтғи бөтөрөлөргә тейеш.
10. Ҡыҙҙарҙы тыуған телдә һәм рус телендә уҡытыу мотлаҡ тип ҡуйылырға, уларҙың белем алыу теләгендә ҡаршылыҡ булмаҫҡа тейеш.

Башҡорттар форумына мөрәжәғәт итеп, Рабиға үҙенең сығышын шундай һүҙҙәр менән тамамлай: "Милләттең яртыһын тәшкил иткән һәм уның үҫешендә, сәскә атыуында ҙур көс булып торған ҡатын-ҡыҙ йәшәһен! Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе, беҙгә быны аңларға ваҡыт!" Төрлө өлкә вәкилдәре тарафынан төрлөсә ҡабул ителһә лә, ялҡынлы телмәре менән 16 йәшлек ҡыҙ үҙен башҡорт милләтенең ысын патриоты, азатлыҡ һәм милләттең прогрессив үҫеше, үҙе тарафынан "Милләт әсәһе" тип нарыҡланған ҡатын-ҡыҙҙың тиң хоҡуҡлылығы өсөн көрәшеүсе тип таныта. "Милләт әсәһе" тигән һүҙ артабан мәңгелеккә уның исеме менән бәйләнә һәм Рабиға уны үҙенең тормошо һәм эшмәкәрлеге менән раҫлай.

Съездан ҡайтҡас, ул уҡытыуын дауам итә. Батшаның ҡолатылыуы тураһындағы хәбәрҙе ҡыуанып ҡаршы ала, февраль революцияһы идеяларын хуплай. Октябрҙе лә шундай кәйеф менән ҡаршылай. Олоҫ ревкомы ҡушыуы буйынса халыҡ араһында пролетар революцияның, Совет власының маҡсаттарын һәм бурыстарын аңлатыу эшенә башкөллө сума. Был эште ул Һамар өлкәһендә генә түгел, Ырымбурға сығып та башҡара.

Яҙмыш ҡушыуы буйынса 1919 йыл һуңында Рабиға Кесе Башҡортостандың баш ҡалаһы Стәрлетамаҡҡа килеп эләгә һәм кейәүгә сыға. Үкенескә күрә, ғаилә бәхете бик ҡыҫҡа була, тормош иптәше үлеп ҡала. Стәрлетамаҡта Рабиға әүҙем йәмәғәт эшмәкәрлеге алып бара, асығыусылар, етем балалар тураһында хәстәрлек күрә, балаларҙы приюттарға, балалар йорттарына урынлаштыра, грамотаға өйрәтә. 1920 йылда Стәрлетамаҡта Эшсе һәм крәҫтиән ҡатын-ҡыҙҙарының беренсе Бөтөн Башҡортостан конференцияһы үткәрелә. 1921 йылдың ноябрендә Стәрлетамаҡта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары өсөн 1,5 мең тираж менән "Азат ҡатын" гәзитенең беренсе һаны донъя күрә. Уны сығарыу инициаторы һәм мөхәррире булып Рабиға тора. Шул уҡ айҙа БАССР Үҙәк Башҡарма комитетының икенсе сессияһында Советтарҙың IX Бөтөн Рәсәй съезына делегаттар һайлана. Рабиғаның кандидатураһы ла тәҡдим ителә. Ул автономиялы республиканан һайланған делегаттар араһында берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ була. Съезд көндәре, В. И. Ленин менән осрашыу уның күңелендә онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдыра. Юлбашсы менән осрашыуға ул милли кейемдә бара.

1922 йылда Рабиғаның тормошо ҡырҡа үҙгәреш кисерә - майҙа ул Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты Президиумы рәйесе Хафиз Ҡушаевҡа кейәүгә сыға. Хөкүмәт Өфөгә күсеү сәбәпле, уларҙың ғаиләһе лә баш ҡалаға күсенә. Ә 1929 йылда Хафиз Ҡушаевты Мәскәүгә яуаплы эшкә күсерәләр. Рабиға бында ла йәмәғәт эшендә теләп ҡатнаша, әммә балаларға белем биреү ынтылышы күңеленә тынғы бирмәй. Уның күп йыллыҡ тәжрибәһен иҫәпкә алып, уны Н. Крупская етәкселегендә РСФСР-ҙың Халыҡ мәғарифы комиссариатына эшкә алалар. Тағы ла бөткөһөҙ командировкалар башлана. Үкенескә күрә, ошо һуңғы эшендә эшләгәндә, командировканан ҡайтып килгәндә уны атып китәләр. Әлегәсә уның үлеме ҡанлы 1937 йылдың асылмаған бер бите булып тора... Ике бала әсәһе Рабиғаға был ваҡытта ни бары 36 ғына йәш була.

Рабиға Ҡушаева ҡайҙа ғына эшләмәһен, ниндәй генә вазифа биләмәһен, һаман да Ватанының патриоты, намыҫ һәм ғәҙеллек өлгөһө булып ҡала. Үҙенең һоҡланғыс тормошо менән ул ғүмерлеккә иң юғары исемгә - "Милләт әсәһе" исеменә лайыҡ!

**Рима СӨЛӘЙМӘНОВА,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТ ЭТНОГЕНЕЗЫ

**Сергей Руденко Ватан фәнендә беренсе тапҡыр этногенез проблемаларына ҡарата комплекслы ысул ҡуллана. Ул бер үк ваҡытта төрлө фәндәрҙе - этнография, антропология, археология, тарих һәм лингвистика мәғлүмәттәрен йәлеп итә.**

Бындай ҡараштан сығып, Руденко башҡорттарҙың этногенезына түбәндәге схеманы бирә. Беҙҙең эраға тиклем II мең йыллыҡта Башҡортостан территорияһында европеоид тибындағы ҡәбиләләр йәшәй. I мең йыллыҡта, беҙҙең эраға тиклем VII быуаттан да һуң түгел, көнсығыштан монголоид тибындағы ҡәбиләләр инә. Улар беҙҙең эраға тиклем VII быуатта Башҡортостан халҡының физик тибына йоғонто яһаған компоненттарҙың береһе була. Урындағы европеоид тибындағы ҡәбиләләр менән ҡушылыу һөҙөмтәһендә был ҡәбиләләрҙең монголоид һыҙаттары бик ныҡ һиҙелмәй.

Руденко күҙаллауынса, Башҡортостандың күпселек халҡы боронғо башҡорт телендә һөйләшкән. Этник яҡтан автор боронғо башҡорттарҙы Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш территорияһы өсөн тиссагеттар (Геродот буйынса), көньяҡ һәм көнсығыш территория өсөн савроматтар менән бәйләү мөмкинлеген белдерә. Беҙҙең эраның беренсе быуаттарында башҡорттарҙы "күсмә малсылыҡ, ялан һыҙатында һунарсылыҡ, тау һәм урман һыҙатында һунарсылыҡ, ҡортсолоҡ, ниндәйҙер кимәлдә ер эшкәртеү һәм ултыраҡ малсылыҡ менән шөғөлләнгән берҙәм ҡәбиләләр төркөмө" тип ҡарарға мөмкин. Шулай итеп, башҡорттарҙың төп этник билдәләре (физик тип, тел, хужалыҡ эшмәкәрлеге, уға бәйле матди мәҙәниәт), Руденко фекеренсә, беҙҙең эраның беренсе быуаттарына формалашып бөтә. Артабанғы эпохаларҙа барған ярһыу тарихи ваҡиғалар, бигерәк тә халыҡтарҙың бөйөк күсеүе, башҡорттарҙың физик тибында, көнкүрешендә һәм телендә сағылыш тапмай ҡалмаған.

"Шулай ҙа, - тип яҙа Руденко, - фин-уғыр ҡәбиләләре менән бәйләнеш тә, Башҡортостан территорияһына һуңыраҡ ингән һунн, аҙаҡ татар-монгол, ҡаҙаҡ ҡәбиләләре лә, ҡалмыҡтар менән үҙ-ара бәйләнештәр ҙә, һуңынан көнбайыштан Ҡаҙан татарҙарының, мишәрҙәрҙең үтеп инеүе лә башҡорттарҙың физик тибын да, телен дә, көнкүрешен дә тамырынан үҙгәртә алмай".

Хәҙерге ваҡытта С. И. Руденконың гипотезаһы археолог Н. А. Мәжитов тарафынан да хуплана. Төрки теорияһы Р. Кузеевтың эштәрендә аныҡ урын ала. Башҡорттарҙың килеп сығышы тураһындағы проблеманы ҡарауға ғалим киң ҡырлы сығанаҡтарҙы - шәжәрәләр, башҡорттарҙың ырыу-ҡәбиләләренең номенклатураһын, тамғаларҙы, урта быуат авторҙарын, археология, антропология, топонимика, фольклор материалдарын йәлеп итә. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе булып "Башҡорт халҡының килеп сығышы: этник составы, таралыу тарихы" китабы донъя күрә.

✓ *Беҙгә субтропик климат киләсәк, тигән фараз бар. Минеңсә, ул фараз юҡҡа ғына барлыҡҡа килмәгән. Шулай ҙа, Ырымбур сүллеге барлыҡҡа килеү ихтималлығы күпкә юғарыраҡ. Тағы ла шишмәләр ҡороуы янай беҙгә.*



# ТӘБИҒӘТТЕ АЛДАП

## уны аңлауы ла

**Һуңғы арала ер-һыуыбыҙ, йыһан-күгебеҙ, шулай уҡ үҙебеҙ менән дә ниндәйҙер аңлашылмаған хәлдәр йышайҙы түгелме? Ҡайҙалыр, Ер шарының әле бер, әле икенсе урынында ниндәйҙер ғәҙәттән тыш хәлдәр күҙәтелә, ә ҡайҙалыр, киреһенсә, ғәҙәтигә әүерелгән күренештәр бөтөнләй башҡаса төҫмөрләнеш ала. Һауаның һиҙелерлек йылына барыуы, ҡайһы бер төр ҡоштарҙың юғалып тороуы, йәнлектәрҙең ҡайһыларының бик аҙайыуы, ә ҡайһы бер төрҙәренең самаһыҙ күбәйеп китеүе нимәгә ишаралай? Аҡһаҡалдар был турала ни уйлай? Халҡыбыҙ тарихында ошоға оҡшаш хәл-ваҡиғалар булһа, уны нисек йырып сыға алғандар? Һуңғы йылдарҙа барыбыҙҙы ла борсоған глобаль проблемаларға яуап эҙләп, Ейәнсура районы Иҫәнгол ауылында йәшәүсе хаҡлы ялдағы агроном, үҙенсәлекле фенолог Зиннур ағай КҮСӘРБАЕВҡа мөрәжәғәт итергә булдыҡ һәм уҙамандан үҙебеҙҙе лә, уҡыусыларыбыҙҙы ла ҡыҙыҡһындырған проблемалы һорауҙарға яуаптар ишеттек. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.**



*Әйткәндәй, бала саҡта шишмәләрҙән, йылғаларҙан ятып рәхәтләнеп һыу эсә инек. Бер ниндәй хәүеф булманы, бер кем дә ауырыманы. Ә хәҙер бит ундай һыуҙарҙы эсеп тә ауырымаҫың бик икеле. Бөрйән, Белорет райондарында һыуы эсергә яраҡлы булған йылғалар әле һаҡланһа ла, ҡала янында урынлашҡан йылғаларҙа хәлдәр башҡасараҡ. Үҙебеҙҙең районды ғына алайыҡ: хаҡлы ялға сығыр алдынан миңә ер комитетында эшләргә тура килгәйне. Шул саҡта Эйек йылғаһы буйын кем теләй, шул соҡоп, ҡомон ташыны. Ағиҙел, һаҡмар буйҙары ла шулай йырғыланып, соҡолоп бөткән хәҙер. Карьерҙар ерҙе генә түгел, ағастарҙы ла юҡ итә. Ҡара еректе ҡырҡып, мебель эшләйҙәр, ә ерек ағасы - йылғаны, шишмәне һаҡлаусы бит. Тик был ағасты бөгөн Урал төбәгендә бик һирәк осратабыҙ. Байлыҡ артынан ҡыуып, кешеләр быуаттар буйы һаҡланып килгән хазиналарҙы юҡ итә.*

### Йәй - оҙая, ҡыш - сигенә…

Мая календары буйынса 2012 йылда ахырызаман була, тиҙәр. Минеңсә, булмаясаҡ ул. 2012 йылдың декабрь айында ҡайһы бер сәйәси үҙгәрештәр көтөлә, шул ғына. Йондоҙҙарға ҡарап яһалған күҙаллауҙарҙың да һәр ваҡыт дөрөҫкә сығыуы шикләндерә. Мәҫәлән, Тауыҡ йылында ашлыҡ уңмай, тиҙәр. Был һынамыш ҡайһы берҙә тура килә, ә ҡайһы саҡта - юҡ. 1975 йылғы ҡоролоҡто алайыҡ, ул да ҡытлыҡ килтереүсе иҫәпләнгән Ҡуян йылына тура килде. Шулай ҙа һәр мөсәл һайын ҡабатланған Ҡуян йылдары беҙгә башҡаса ҡоролоҡ алып килмәне.

Быйылғы яҙ үҙ ваҡытында килһә лә, көҙҙөң ҡыш яғына күсә барыуы, ә йәйҙең оҙайыуы хафаға һала. Уралда ҡыш бөтмәҫ тә ул, шулай ҙа үҙгәрештәр буласағы хәҙер көн кеүек асыҡ. Экологтар бушҡа тауыш күтәрмәйҙәр, тип уйлап ҡуяһың.

Көньяҡ Уралда яҙғы ҡырау бынан 10 йыл элек 10-12 июндә төштө, һуңғы ваҡытта ҡырау бер айға һуңлай. Быйыл ҡырау бик һуң төштө - 17 октябрҙә генә. Шуға күрә көнбағыш яланда йәшел көйө ултыра. Ҡырсылыҡ менән шөғөлләнгән кешеләргә ҡырауҙың да үҙ ваҡытында төшеүе мөһим. Көнбағышҡа ҡырау һуҡһа, уның япрағы ҡойола ла, үҙе үҫеүҙән туҡтай һәм бешә башлай. Тимәк, мәлендә төшкән ҡырау көнбағышты тиҙ арала өлгөртөп, уны көҙгө ямғырҙарға ҡалдырмай, юғалтыуһыҙ йыйып алырға мөмкинлек бирә. Тәбиғәттең ҡырауы ла файҙалы. Тәбиғәттә бер нәмә лә артыҡ түгел. Ҡырау тәбиғәтте ҡышҡа иҫкәртә әмәл дә. Ул күп кенә үҫемлектәрҙе алдан өтөп алып иҫкәртә, ҡышҡы йоҡоға әҙерләй, уларҙы ҡапыл башланған һыуыҡтар стресынан ҡотҡара.

Алда ниндәй һауа торошо килерен тәбиғәт һәр ваҡыт үҙе иҫкәртә. Әйтәйек, беҙҙең яҡта ямғыр туктамай яуып торһа, урындағы халыҡ ел йүнәлешенә иғтибар итә. Ел төньяҡтан иҫә башлаһа, ғәҙәттә, оҙаҡҡа һуҙылған ямғыр туктай. "Болоттар йылғаның тамағына ҡарай ағыла башлаһа, көн аяҙая", тиҙәр. Ҡарлуғастар ҙа һауа торошо тураһында хәбәр итә: әгәр бейек осһа, көн аяҙая, ә аҫтан ҡәйелеп осһа - ямғырға. Был - Урал тауҙарының йөнтоһо менән аңлатыла. Тағы ла, һынамыштар буйынса, сейә япрағын ҡойһа, оҙаҡламай ҡар ятасаҡ, тигән һүҙ. Быйыл сейә әле яңы япраҡ ҡойып бөтөп бара.

### Экологтар дөрөҫ саң ҡаға…

Беҙгә субтропик климат киләсәк, тигән фараз бар. Минеңсә, ул фараз юҡҡа ғына барлыҡҡа килмәгән. Шулай ҙа, Ырымбур сүллеге барлыҡҡа килеү ихтималлығы күпкә юғарыраҡ. Тағы ла шишмәләр ҡороуы янай беҙгә: шишмәләр ҡороһа, уларҙан һыуланған йылға-күлдәр ҙә һайығасаҡ. Стәрлетамаҡ ҡалаһы төҙелгән саҡта Өфөнән Ағиҙел буйлап баржалар йөрөп торған. Бөгөн иһә, бигерәк тә ҡайһы бер ҡорораҡ йылдарҙа, Өфөлә лә ҡомға терәлә ул баржалар. Шишмәләр ҡороуы нефть, газ ятҡылыҡтарын ер аҫтынан һурып бөтөрөүгә бәйле. Элегерәк ер аҫтының нефттән бушаған урындарына һыу ебәрә инеләр, тимәк, шишмәләребеҙҙең һыуы шунда йүнәлеш алған. Нисек кенә булһа ла, эсәр һыуыбыҙ шулай буш ярыҡтарға ағып төшә барыбер. Баймаҡ, Хәйбулла, Учалы райондарында рудниктар бихисап. Һуңғы йылдарҙа ошо райондарҙың шишмәләре ҡорой. Быға әлеге лә баяғы кеше үҙе ғәйепле.

Ошонан сығып, тағы бер етешһеҙлек күҙгә ташлана: йылғаларҙы быуған саҡта быуаларҙың дөрөҫ урында урынлашыу-урынлашмауы тураһында ла ентекләберәк уйларға кәрәк. Юғиһә, ҡайһы саҡта ашығып, ҡайһы бер шарттарҙы күҙ уңынан ысҡындыралар. Мәҫәлән, Ейәнсура районына ҡоролоҡ хас, шуға ла ундағы шишмәләрҙе уятыр өсөн сама менән 30-40 саҡрым ара менән яһалма күлдәр барлыҡҡа килтергәндә, микроклимат ипкә килер ине. Был тәкдим менән етәкселеккә лә мөрәжәғәт иткәнем булды, әммә улар ҡолаҡ һалманы. Әгәр ҙә әлеге план тормошҡа ашырылған булһа, шишмәләр уяныр, төбәктәге дымлылыҡ та нормаға килер ине. Шулай ҙа быйылғы көҙ һуңғы 15 йылдан айырмалы рәүештә ямғырлыраҡ булды. Шуға күрә, икенсе йыл йәй ҡорораҡ, ямғыры әҙерәк булған хәлдә лә, быйыл ерҙә дым булыуы күңелде тынысландыра, мул ғына уңышҡа өмөт уята.

Ҡоштар миграцияһы үҙгәрә икән, төп сәбәп булып, минеңсә, һыу ятҡылыҡтарының бысраныуы, ҙур заводтар төҙөлөүе, кәҫә телефоны башняларының күбәйеүе тора. Тап ошо сәбәптәр арҡаһында ҡарғалар, сыйырсыҡтар, ҡарлуғастар юғала бара бөгөн.

Әйткәндәй, бала саҡта шишмәләрҙән, йылғаларҙан ятып рәхәтләнеп һыу эсә инек. Бер ниндәй хәүеф булманы, бер кем дә ауырыманы. Ә хәҙер бит ундай һыуҙарҙы эсеп тә ауырымаҫың бик икеле. Бөрйән, Белорет райондарында һыуы эсергә яраҡлы булған йылғалар әле һаҡланһа ла, ҡала янында урынлашҡан йылғаларҙа хәлдәр башҡасараҡ. Үҙебеҙҙең районды ғына алайыҡ: хаҡлы ялға сығыр алдынан миңә ер комитетында эшләргә тура килгәйне. Шул саҡта Эйек йылғаһы буйын кем теләй, шул соҡоп, ҡомон ташыны. Ағиҙел, һаҡмар буйҙары ла шулай йырғыланып, соҡолоп бөткән хәҙер. Карьерҙар ерҙе генә түгел, ағастарҙы ла юҡ итә. Ҡара еректе ҡырҡып, мебель эшләйҙәр, ә ерек ағасы - йылғаны, шишмәне һаҡлаусы бит. Тик был ағасты бөгөн Урал төбәгендә бик һирәк осратабыҙ. Байлыҡ артынан ҡыуып, кешеләр быуаттар буйы һаҡланып килгән хазиналарҙы юҡ итә.

### Һәр бер йомран - агроном…

Мин күп йылдар агроном булып эшләнем. Ни өсөндәр беҙҙә вегетатив осоро ҡыҫҡа булған сорттарҙы алып ҡайтып сәсеп ҡарайҙар. Мин: "Егеттәр, буш менән булмағыҙ", - тим. Ҡыҫҡа вегетатив осорло культуралар беҙҙең көньяҡ райондар өсөн ҡулай түгел. Улар төньяҡ-көнсығыш райондары: Салауат, Мәсетле, Дыуан өсөн яраҡлы. Ул яҡтарҙа йылы етмәй, ә дымлылыҡ етерлек була. 1975 йылдағы ҡоролоҡ ваҡытында ла уларҙа хәлдәр бик үк насар булманы бит. Ҡайһы бер культураларға йылылыҡ етмәгәнгә күрә, ул яҡтарға вегетатив осоро ҡыҫҡа булған сорттар кәрәк. Ә бына беҙгә йылылыҡ та, көндәр оҙайлығы ла етә, ә дымлылыҡ аҙыраҡ. Шуның өсөн беҙҙең яҡтарға ҡоролоҡҡа сыҙамлы сорттар кәрәк. Башҡорт селекционерҙары һәр районға тәғәйен сорт эшләй алмай. Шуға күрә, районға тәғәйен сорттар юҡ икән, Ҡаҙағстандан, Ырымбурҙан килтерелгән сорттарҙы сәсергә була беҙҙә. Беҙ ғүмер буйы Һарытау өлкәһенән килтерелгән бойҙайҙы сәсеп килдек. Күптән түгел бер агроном бойҙайҙың 80 көндә өлгөрөп етә торғанын сәсеп ҡараны. Беҙҙең иҫкәртеү-кәңәштәргә ҡолаҡ һалмағанға күрә, уңышы бик самалы булды. Уның бойҙайы урындағы әсәлеккә тиҙ биреште - ҡатты ла ҡалды. Һығымта шулай: ҡоролоҡ килә, тип ҡурҡып ултырғансы, уға ярашлы сорттарҙы сәсеп, ҡоролокто әҙерләнеп ҡаршыларға кәрәк.

Агроном булып эшләгәндә һауа торошо менән ҡыҙыҡһыныу, уның ниндәй булырын алданыраҡ төҫмөрләү ихтыяжы үҙенән-үҙе килеп тыуҙы. Сөнки, яҙғы сәсеү эштәре тамамланыу менән - ямғыр, уңыш йыйып алыу ваҡыты етеү менән - аяҙ көн көтөп, күккә ҡарайһың да йөрөйһөң.

Ҡаҙағстанда ҡоролоҡ беҙҙең яҡтағы иң ҡоро килгән йәйҙәргә ҡарағанда күпкә көслөрәк була. Әммә улар күктән бер тамсы ямғыр төшмәгән йылдарҙа ла гектарынан 20-шәр центнер иген алыуға өлгәшә. Быҙың сере - технологиялар ҡулланыуҙа. Бойҙай үҫеп сыҡҡандан һуң улар баҫыуҙарын махсус химик матдә менән эшкәртә. Артабан был матдә пленка барлыҡҡа килтерә. Төндә һыуытҡан саҡта һыу конденсаты барлыҡҡа килә һәм ер һуғарыла.

Һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығы белгестәрен 50 мең аҡса вәғәҙә итеп тә ауылға ҡайтарып булмай. Сөнки белгестәр шуны аңлай: агрономия тармағында тәжрибәле белгес булам тиһәң, кәмендә биш йыл үҙ ҡулдарың менән ҡара ерҙә соҡонорға кәрәк. Тырнаҡтарың айырылып бөтмәйенсә, һин агроном түгел. Китапта яҙылған буйынса түгел, ә тупраҡта яҙылған ғилемде үҙләштереп, яҡшы уңыш алырға тырышырға кәрәк. Сәлишев, Мальцев, Бараев кеүек элекке белгестәрҙең ғилемен, тәжрибәһен бөгөнгө техника менән бергә ғәмәлдә ҡулланырға кәрәк. Сәсеү башланһа, һәр кем агроном була ла китә ул, тик урып-йыйыу эштәре етһә, берәү ҙә юҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яуаплылыҡ алырға теләмәй күптәр. Һәр бер йомран - агроном, тиҙәр бындай осраҡта.

Агроном булып эшләгән ваҡытта минең менән ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә була торғайны. Шуларҙың берәүһен һөйләйем. Сираттағы яҙғы сәсеү эштәре башланырға торған май баштары. Районның беренсе секретары, үҙе лә агроном кеше, беҙҙе, агрономдарҙы йыйып, үҙенсәлекле ысул буйынса бойҙайҙы май башынан уҡ сәсергә бойорҙо. Технология шунан ғибәрәт икән: төрлө компоненттар менән байытылған орлоҡтарҙың һәр береһен полиэтиленға төрөп, иртә яҙҙан сәсәһең һәм, йәнәһе лә, яҡшы уңыш алаһың. Әммә мин, райкомдың беренсе секретарынан әләгәсәгенә ҡарамайынса, бойҙайҙы барыбер майҙың урталарында ғына сәс-

*✓ Йәштәр ҙә дөйөм система йоғонтоһонда ҡала. Үҙ ҡиммәттәрен, ҡарашын иһә бик һирәктәр генә булдыра ала. Йәштәрҙең күбеһе киләсәк тураһында уйланмайынса, бөгөнгө көн менән генә йәшәй.*



тем һәм уны йәй башындағы ҡыраүҙан һаҡлап алып ҡалдым, бының менән үҙемдең хаҡлығымды иҫбатланым. Ә бит иртә сәселгән культураның ҡырауға эләгерен райком секретары, үҙе лә агоном булараҡ, белгән бит инде ул. Белә-күрә шундай бойороҡтар биргеләй торғайнылар шул элек.

### Рәсәйгә ауыл ҡасан кәрәгер?

Тарихта тәбиғәт катаклизмдары (Туфан һыуҙары ҡалҡыуы, боҙлоҡ шыуышыуы) һәм һуғыштар арҡаһында тотош халыҡтарҙың бер урындан икенсе урынға күсеүе билдәле. "Халыҡтарҙың бөйөк күсенеүе" тип атала ул мәлдәр. Хәҙер төрлө сығанаҡтарҙа әйтелеүенсә, Американың бер өлөшөн, Италияны, утрауҙар архипелагында урынлашҡан Японияны, Голландияны һыу баҫыуы ихтимал. Шуға күрә, ерһеҙ тороп ҡалған кешеләр Евразияға, атап әйткәндә, Алтайға, Урал тауҙарына ынтыласаҡ барыбер. Һыу баҫмаһа ла, ер мәсьәләһе Ҡытай халҡын да борсой, сөнки уларҙа халыҡ ишәйә бара. XX быуат урталарында ерҙә бөтәһе 4 миллиард самаһы кеше йәшәгән булһа, бөгөн ул һан ике тапҡырға артып, ете миллиардҡа барып етте. Рәсәйҙә демографик хәлдең киҫкен тороуы сәбәпле, беҙҙең илдең ерен дә барыбер бүлешеп бөтәсәктәр, минеңсә. Был хәл бер ниндәй һуғышһыҙ атҡарылыр, тип уйлайым. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһында был мәсьәлә күтәрелер ҙә, Рәсәйгә шарт ҡуйылыр, дәғүәләр белдерелер. Әле үк "Себерҙең байлығын ни өсөн Рәсәй үҙе генә тотона?" тип, дәғүә белдерәләр. Себер урманын, нефтен, газын һатыусы Рәсәйҙән көнләшеүселәр күп бит бөгөн. Ни генә тимә, Себер һәр Алыҫ Көнсығыш Ҡытай һәм башҡа дәүләттәр тарафынан тыныс юл менән яулана бара ла инде.

Тарихтан билдәле булыуынса, һәр империя ҡасан да булһа тарҡала, юҡҡа сыға. СССР-ҙа империяға оҡшаш система булды, тип әйтергә урын бар. Элегерәк мин илебеҙҙең дә бер мәл тарҡалыуы ихтимал тип уйлаһам да, үҙем быға ышанып етмәнем, сөнки СССР көслө дәүләт ине. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, минең шик-шөбһәләр ысынға сыҡты ла ҡуйҙы. Был хәлдән һуң СССР ваҡытында төҙөлгән бар нәмә яйлап үҙләштерелде, шунлыҡтан колхоз-совхоздар ҙа юҡҡа сыҡты, йотолдо. Беҙ нимә менән тороп ҡалдыҡ бөгөн? Ауылда колхоздар, совхоздар бөтөү нимәгә килтерҙе? Ғөмүмән, ауыл өсөн файҙалы булдымы был? Ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре, белгестәр ауылдарға ҡайтмай башланы, эш урындары ҡыҫҡарҙы, шунлыҡтан йәштәр ауылдарҙан китә башланы. Шуға өҫтәп, мәктәптәр ябыла. Рәсәй бөгөн донъя баҙарына нефть, газ сығарып һата икән, был әлегә генә шулай. Тиҙҙән был байлыҡтар бөтәсәк һәм беҙҙең алға башҡа төрлө юл менән аҡса табыу зарурлығы килеп баҫасаҡ. Шул сағында етәкселек әлегә ҡулланылмай ятҡан ҡара ер ресурстарын ҡулланырға керешәсәк, минеңсә. Гитлерҙың Рәсәйҙәге уңдырышлы тупраҡты вагон-вагон итеп үҙ иленә ташыттырғанлығы билдәле. Тимәк, киләсәктә Рәсәйҙә ауыл хужалығы тармағына иғтибар артасаҡ, тип көтөргә, өмөтләнергә генә ҡала.

Тәбиғәт менән экология мәсьәләләрен дөрөҫ күтәрәләр бөгөн. Әгәр яҡшы йәшәргә теләһәк, беҙ иң беренсе сиратта тәбиғәткә һаҡсыл ҡарарға өйрәнергә тейешбеҙ. Рәсәйҙә ниндәй генә юл менән булһа ла аҡса табырға ынтылғандар, байҙар - тағы ла мөлкәтен арттырыу, ә бай булмағандар һис юғы тере ҡалыу өсөн тәбиғәтте тәләфләй әле. Шуға күрә беҙҙең илдә экологик проблемаларҙы тиҙ арала ғына хәл итеү мөмкин дә түгел. Тәбиғәткә булған ҡарашты үҙгәртергә кәрәк. Европала ла, Америкала ла, ҡайһы бер Азия илдәрендә лә тәбиғәт менән шаярыу үҙҙәре өсөн насар бөтәсәген аңлайҙар һәм шуға күрә уға зыян итмәҫкә тырышалар. Ә беҙҙә ерҙәр күп - бер урынды тәләфләйбеҙ ҙә, икенсе урынға күсеп ултырабыҙ. Франция, Германия кеүек бәләкәй генә ерҙә йәшәгән булһаҡ, бәлки, ергә, тәбиғәткә ҡараш та икенсе төрлөрәк булыр ине.

# БУЛМАЙ,

## еңелдән түгел...

### Икеләнеү тойғоһо

Тәбиғәттә быйыл ҡыҙыҡ күренештәр күҙәтелде: ҡаҙҙар икенсе тапҡыр себеш сығарырға ултырҙы, муйылдар бер йәйҙә икенсегә сәскә атты, ә сейәләр иһә, икенсе тапҡырға уңыш бирҙе. Муйылдың бер йәй эсендә ике тапҡыр сәскә атыуы 1969 йылда, 70-се йылдар аҙаҡтарында тағы ла ҡабатланды. Быны мин шулай аңлатыр инем: көҙ етһә, ағастар икенсе йыл яҙҙан сәскә атырға әҙерләнеп, бөрөләнә башлай. Ошо мәлдә көндәр ҡапыл ғына һыуытып, бер-ике көндән һуң йәнә үтә йылытып ебәрһә, шул саҡта ҡыҫҡа ваҡытлы икеләнеү барлыҡҡа килеп, ағастар япраҡ ярыуы ла мөмкин. Тимәк, икеләнеү тойғоһо кешелеккә генә түгел, үҫемлектәр донъяһына ла хас. Ҡайһы бер йылдарҙы муйылдың емештәре ашарға яраҡһыҙ - бөтөнләй икенсе формала була. Минеңсә, был күренеште лә һауа торошона бәйләп аңлатырға булалыр, яуапты ла ошо тәңгәлдән эҙләргә кәрәк. Юғиһә, кешеләр быларҙы радиацияға, химикаттар тәьҫиренә фараз итеүсән. Әлбиттә, экологияның йоғонтоһо булмауын да бөтөнләй инҡар итергә ярамай. Ә ҡаҙҙарҙың икенсе тапҡыр баҫырға ултырыуы йыш күҙәтелә. Тәбиғәткә генә бәйләргә ярамай - уның сәбәптәре лә бар. Мәҫәлән, Голландияла ләлә сәскәһен әллә нисә тапҡыр йыйып алалар.

### Паразиттар тураһында

Колорадо ҡуңыҙҙарының ике төрө бар, ти ғалимдар: йылына бер мәртәбә һәм күп тапҡыр үрсей торған төрҙәре. Беҙҙең яҡта улар бик таралһа ла, бына Учалы районында улар бик аҙ. Сөнки ул яҡта ер ныҡ туңғанға күрә, улар ҡышын үлеп бөтә. Учалыла ҡарҙың аҙыраҡ яуыуы ла быға сәбәп булып тора. Колорадо ҡуңыҙы баҡсасылар өсөн дөйөм бер бәләгә әүерелгәнгә күрә, хәҙер унан ҡотолоу юлын күмәкләп эҙләргә мәжбүрбеҙ. Агрономдар менән генә түгел, башҡа профессия кешеләре менән аралашҡан саҡта уларҙы ла был проблема борсоуы күренә. Бер танышым һөйләүенсә, ололар араһында ғауға ҡупҡан бер мәл: араларындағы берәү картуф ҡуңыҙына ҡаршы ысул табыуы тураһында белдергән, тик серҙе асырға ашыҡмай икән. "Тәмәке менән ағыулайһыңмы уларҙы, әллә башҡа төрлө юл менән бөтөрәһеңме?" тип һорайҙар икән унан башҡалар. Улар бик үтенеп, ысулды өйрәткән өсөн һәр беребеҙ 100-әр һум аҡса бирәбеҙ, тип тә белдергәс, белгес етди төҫ менән: "Колорадо ҡуңыҙы менән көрәштең бына тигән ысулын уйлап сығарҙым, улар минең баҡсала бөтөнләй юҡ, ауыҙҙарын йырҙым уларҙың, мин быйыл картуфты бөтөнләй сәсмәнем", - тигән. Тағы бер кеше баҙарҙа ҡом иләп ултыра икән. Үҙе: "Колорадо ҡуңыҙына ҡаршы матдә һатам, алығыҙ, алығыҙ", - тип һөрәнләй. Быға бер һатып алыусы килә лә, был серле сараның нисек башҡарылыуы тураһында һорай. Ҡом һатыусы: "Ошо ваҡланған ҡомдо ҡуңыҙҙың күҙенә һибәһең дә, ул албырғап ҡалған саҡта аяҡ-ҡулдарын бәйләй һалып, бөжәкте ҡытыҡлап үлтерергә була", - тип өйрәтә. Быларҙың һөйләшеүен ишетеп торған тағы бер һатып алыусы: "Ә мин, мәҫәлән, цементты һыуҙа иҙеп, картуф оно менән болғатып, картуф баҡсаһының уртаһына ултыртып ҡуям. Мәхлүҡтәр шуны бутҡа урынына ашап, эстәре ҡатыуҙан үлеп ҡала", - тип тәжрибәһе менән уртаҡлашҡан. Кемдер берәү ҡуңыҙҙарҙы борос менән ҡыуыуы тураһында яҙа. Әммә был да ярҙам итмәй, сөнки картуф та, борос та - бер ғаиләгә ҡараған үҫемлектәр. Колорадо ҡуңыҙы менән көрәшеүе ауыр бөгөн, шуға ла сараһыҙҙан ошондай ләҡаптар уйлап сығарыла инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, кешелек ялған ҡиммәттәргә ымһынып, үҙ-үҙен алдап йәшәгән хәлдә лә, тәбиғәтте алдай алмаясаҡ. Киреһенсә, кешелек үҙенә комфорт тыуҙырыу маҡсатында тәбиғәтте ни тиклем сарыфлаған һайын, ахырызаманды шул тиклем үҙенә яҡынлатасаҡ ҡына. Ә тәбиғәт иһә, кешелекте йә уның ҙур өлөшөн юҡ итеү юлы менән үҙен аяҡҡа баҫтырасаҡ. Бына нимә өсөн кәрәк кеше күңеле менән тәбиғәт араһында гармониялы мөнәсәбәт. Ахырызаман ошо гармонияның емерелеүенән башлана. Билдәле фенологтың тәбиғәт һәм кешелек хаҡындағы күҙәтеүҙәрен һәм фараздарын тыңлағандан һуң ошондай һығымталарға килдек. Ә һеҙ был хаҡта нисек уйлайһығыҙ?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо,**
**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ӘЙТӘГҮР!

# ИҢ ҘУР ЙӨГӨНДӨ...

## үҙең генә күтәрә алаҫаҡһың

**Бөгөнгө йәштәр өлкән быуынға алмаш булыуын ниндәй кимәлдә тоя, ил алдындағы бурысын улар нисек тормошҡа ашырырға тейеш? Ошо һорау менән егеттәр-ҡыҙҙарҙың үҙҙәренә мөрәжәғәт иттек.**

**Рәил СӘҒИТОВ, студент, Әбйәлил йәштәре берлеге рәйесе:** Мәсьәләгә төрлө күҙлектән ҡарарға була. Йәштәрҙең һөнәри кимәленән сығып фекер йөрөткәндә, оло быуынға лайыҡлы алмаш килә, тип әйтеүе ҡыйын. Хәҙерге студенттарға белем етмәй, күптәренә фәндәр ауыр бирелә. Ләкин иң мөһиме - әхлаҡи, рухи тәрбиәлер ул. Йәштәрҙең дипломлы, әммә белемһеҙ булыуы ла башлыса тәрбиәһеҙлектән киләлер. Күптәре эскелек, аҙғынлыҡ юлынан сыға алмай. Әлбиттә, улар үҙҙәрен оло быуынға алмаш итеп күрмәй, иңдәрендә бер ниндәй бурыс та, яуаплылыҡ та тоймай. Тәрбиә кимәле йәһәтенән беҙ мосолман илдәре йәштәренән бик ҡалышабыҙ. Әйтәйек, Төркиәлә иман, мәрхәмәтлелек, тәртип төшөнсәләре тәүге урында тора. Ә беҙҙә күптәр имандан бик алыҫ. Ғәйеп йәштәрҙә генә түгел. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөн өлкәндәр ҙә йәш быуын алдында үҙ абруйын юғалта бара. Шул уҡ ваҡытта йәштәр үҙ ризаһыҙлығын, ҡәнәғәтһеҙлеген уларға асыҡ белдерергә ҡыймай. Бөгөн бер көс булып күтәрелеп, үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы үҙебеҙ яҡлай алмайбыҙ. Йәштәр ил алдында яуаплылыҡ тойһон өсөн иң тәүҙә үҙен түгел, ә туғандарын, яҡындарын уйлап йәшәргә тейештер. Ошонан оло тойғо барлыҡҡа киләсәк. Ә бының өсөн әхлаҡи йәһәттән үҫергә кәрәк.

**Лариса МӨСЛИМОВА, философия фәндәре кандидаты:** Йәштәр иң ирекле, ижади ҡатлам, тигән ҡараш тороҡло һаҡлана. Әммә был дөрөҫлөккә тап киләме? Йәш быуынды социаль-сәйәси ҡоролоштан айырып ҡарап булмай. Йәштәр ҙә, башҡа социаль төркөмдәр кеүек үк, дөйөм система йоғонтоһонда ҡала. Үҙ ҡиммәттәрен, ҡарашын иһә бик һирәктәр генә булдыра ала. Йәштәрҙең күбеһе киләсәк тураһында уйланмайынса, бөгөнгө көн менән генә йәшәй. Беҙҙең йәш быуын киләсәк хаҡында борсолоуҙарҙан, хәҙерге заман хөрәфәттәренән азат, тип әйтергә лә була, әлбиттә. Ләкин был ялған азатлыҡ, уның асылында битарафлыҡ ята. Хәҙерге йәмғиәттә кеше күпкә һуңғараҡ үҙаллы шәхес булып үҫеп етә. Элек мәктәпте тамамлағас та үҙаллы тормош башлағандар. Ә хәҙер күбеһе 30 йәшендә лә ата-әсәһенә һыйынып йәшәй. Был күренеш кешенең шәхси яуаплылығына кәртә булып тора, ғәмһеҙлеккә юл аса. Яуаплылыҡ - үҙ-үҙеңде аңлау, ҡылыҡтарыңа, башҡарған эшеңә баһа бирә белеү. Хәҙерге йәштәрҙә яуаплылыҡ сифаты бармы, юҡмы, минең өсөн асыҡ мәсьәлә булып ҡала.

**Жәлил ХӘБИБРАХМАНОВ, менеджер:** Йәштәрҙең дә төрлөһө була. Яуаплылыҡ тойғоһо көслө булған кешеләр ҙә, киләсәк өсөн бер ниндәй яуаплылыҡ тоймаусылар ҙа бар. Кеше һәр ваҡыт кемгәлер, кемдеңдер алдында бурыслы. Әммә уны төрлө кимәлдә үтәргә мөмкин. Яуаплылыҡ тигәндә, минең өсөн Ислам динендә ҡабул ителгән төшөнсә яҡыныраҡ. Беҙ Аллаһы Тәғәлә тарафынан булдырылғанбыҙ, һәм тәү сиратта уның алдында йөкләмәләребеҙ бар. Хоҡуҡтар түгел, ә бурыстар беренсе урынға ҡуйыла. Шуға күрә эш-ҡылыҡтарға этәргес көс булып нәфсе торорға тейеш түгел. Нәфсе башҡаларҙан байыраҡ, көслөрәк булырға, рәхәтерәк йәшәргә генә өндәй. Ә беҙҙе Аллаһы Тәғәлә, ғаиләбеҙ, йәмғиәт алдында торған бурыстарыбыҙ, яуаплылығыбыҙ алға этәрергә тейеш. Хәҙерге йәштәр ололарға лайыҡлы алмашмы? Һәр быуындың үҙ ҡыйынлыҡтары. Әммә олатай-өләсәйҙәребеҙ үткән һынауҙы бөгөнгө йәш быуын, минеңсә, үтә алмаҫ ине. Шулай ҙа беҙҙең өсөн дә һынауҙар етерлек. Донъяуи финанс көрсөгө, АҠШ -тың мосолман илдәренә ҡарата һөжүме ниндәй үҙгәрештәргә килтерер, билдәһеҙ. Һәр хәлдә, яҡшыға булмаясаҡтыр. Бәлки, үҫеп килгән быуын ололарға лайыҡлы алмаш түгелдер, әммә илдең башҡа йәш быуыны юҡ. Нисек кенә булмаһын, бурыстарыбыҙ үҙ иңдәребеҙҙә ҡала, уларҙы беҙҙең өсөн бер кем дә үтәмәйәсәк.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**







**Хәйбулла районының Оло-Арыҫлан ауылында бик ябай, эшсән, ихлас, ҡунаҡсыл халыҡ йәшәй. Улар йыр-моңға бик шәптәр, йор һүҙлеләр. Күмәкләп йыйылғанда, мәжлестәрҙә бер-береһен мәрәкәләп тә алалар. Халыҡ араһында киң таралған ҡыҙыҡлы хәлдәрҙең бер нисәүһен һеҙгә лә еткергем килә. Ауылыбыҙҙа бик мәрәкәсел Ҡотләхмәт тигән олатай менән Мөбәширә тигән инәй йәшәгәйне. Икеһе лә хәҙер мәрхүмдәр, йәндәре йәннәттә булһын. Һүҙем улар хаҡында.**

## Вот такой картошка

Элек күмәкләшеп күрше Ырымбур өлкәһендәге Ҡыуандыҡ, Медногорск ҡалаларына баҙарға йөрөй торғайнылар. Әйберҙәрен баҙарҙа тороп та, өй һайын йөрөп тә һатҡандар. Ҡотләхмәт олатай бер саҡ урам буйлап китеп барһа, бер йыуан мәрйәнең көйәнтәләп һыу алып ҡайтып барғанын күреп ҡала:

- Купи картошку, - ти ул ихлас йылмайып.

- А картошка хорошая, крупная? - тип һораша башлай мәрйә. Үҙенең ике ҡулы көйәнтә һыртында. Олатай, күп уйлап тормай, мәрйәнең ике ҙур түшен тотоп ала ла:

- Вот такой картошка, - тип әйтеп һала. Бабайҙың етеҙлегенә, ҡыйыулығына ни тип әйтергә белмәй, мәрйә көлөп ебәрә. Ҡулдары менән һелтәнер ине лә улары көйәнтә өҫтөндә бит инде. Шулай ҙа мәрйә асыуланмай, бабайҙың бөтә картуфын да һатып алып ҡала.

Олатайыбыҙ үҙенең йылғырлығы арҡаһында картуфын тиҙ генә һатып та бөтөрә. Шунан бирле беҙҙең ауылда картуф унһа, "Вот такой картошка", тейҙәр.

## "Йылынып" сыға

Ҡотләхмәт бабай сираттағы тапҡыр баҙарға барғанда көн үтә лә һыуыҡ, туҡтамай ямғыр яуған ваҡыт була. Көнө буйы баҙарҙа тик тороп, өшөп китә. Йән-яғына ҡаранып торһа, баҙарҙың ҡаршы яғында ресторанда туй барғанын күреп ҡала. Олатайыбыҙ күп уйлап тормай, тауарын күршеһенә ҡалдыра ла шул яҡҡа ынғайлай. Аяҡтары үҙенән-үҙе ресторан эсенә алып инә. Эстә урыҫтар рәхәтләнеп бейеп йөрөйҙәр икән. Олатай юғалып ҡалмай, улар менән ҡуша бейергә төшөп китә. Өҫтөндәге ҡыптыр, көтөүсе плащын да һалырға онота. Урамдан ингән мосафирҙы ашатып-эсереп, һыйлап сығаралар. Шулай итеп, олатайыбыҙ әрһеҙлеге арҡаһында йылынып сыға.

## Серле төргәк

Мөбәширә инәйҙең Саҙиҡа тигән күршеһе "Кисә Вәзәмгә барғайныҡ, ҡыҙың күстәнәс ебәрҙе", тип, бер төргәк индереп биргән. Үҙе тиҙ генә, эше күплегенә һылтанып, сығып китә. Мөбәширә инәй төргәкте ипләп кенә асып ҡараһа, унын эсендә картуфтың әрселгән ҡабығы, гәзит-маҙар кеүек ташландыҡ әйберҙәр ята, ти. Шанҡып, аптырап торған да инәй, 1 апрель икәнен иҫенә төшөрөп, шарҡылдап көлөп ебәргән. Ишеген асып, күршеһенең өйөнә ҡараһа, уныһы ла үҙҙәренең өй ишегенән башын тығып ҡарап, рәхәтләнеп көлөп тора, ти. Инәй йоҙроғон күрһәтеп, өйөнә кире инеп, төргәккә бетәү картуф өҫтәп төрөп, ауылдың икенсе урамына йүгергән.

- Кисә Гүзәл Өфөнән ҡайтты. Вәхитең күстәнәс биреп ебәргән, - тип, ҡулындағын Йәмилә инәйгә тотторған да үҙе тиҙ үк сығып тайған. Йәмилә инәй рәхмәтен саҡ әйтеп өлгөргән. Төргәкте асырҙан алда тотҡолап ҡараған. Бетәү картуфты тотоп, балаҡайым алма, лимон һалдымы икән, тумалаҡ нәмәләре бар, тип уйлаған. Мөбәширәгә, күстәнәсләп сәй эсәйек, тип әйтеп өлгөрә алмағанына үкенеп тә ҡуйған. Шулай ҙа төргәкте асмаған, балалар эштән ҡайтҡас, бергәләп ашарбыҙ, тип, шкафка ҡәҙерләп һалып ҡуйған. Әммә сабырлығы оҙаҡҡа етмәгән, Вәхитем нимәләр һалды икән, асып ҡарайым әле, тип, кире төргәкте ҡулына алған. Уны асып ҡараһаа-а-а-а, саҡ һушы китмәгән. Шулай шанҡып арыуыҡ ҡына ултырған был. Мөбәширә ниңә минең менән улай ҡаты шаярҙы икән, тип, инәйҙе әрләй-әрләй төргәкте кире илтергә булған. Тупһаны ашатлап сыҡҡас, "Бәй, бөгөн 1 апрель дә инде", тигән уй башына дыңҡ итеп ҡалған, үҙенән үҙе көлгән-көлгән дә ут күршеһен ҡыҙыҡ итмәксе булып, төйөнсөгөн уға индереп тапшырған. Уныһы - икенсеһенә. Шулай итеп, бер төйөнсөк картуф менән картуф ҡабығы бар ауылды тиерлек урап сыҡҡан. Был мажараны әле лә 1 апрель етһә, иҫкә төшөрөп алалар.

## Ат урларға китте...

Мөбәширә инәй килендәше Хәҙисә менән сәй эсеп ултыралар икән. Знакум урыҫ килеп ингән. Иҫәнләшкәс, олатайҙың ҡайҙалығын һораған. Инәй ҡулын ҡырға һелтәп:

-Ҡотләхмәт дома нет, ул ней, таң менән лушет украл, - тигән.

Урыҫ аптырап, ҡашын күтәреп, ни әйтергә белмәй:

- Дә-ә-ә?- тип һуҙып ҡуйған ышаныр- ышанмаҫ.

- Эйе, эйе, лушет украл, - тип ҡабатлаған инәйебеҙ. Урыҫ, олатай булмағас, сәйгә туҡталып тормаған. Ул сығып киткәс, эргәһендәге Хәҙисә инәй:

- Урыҫҡа нимә тип әйткәненде беләһеңме үҙең? - тип һораған.

- Эйе, Ҡотләхмәт өйҙә юҡ, ат эҙләй китте тинем, - тигән, бер ни булмағандай.

- Шулай булмай торһон, һин бит бабайынды "ат урлаған" тинең,- тигән килендәше.

- Э-э-э-эй, Аллам! Хәҙер нимә эшләйбеҙ инде, - тип аптыраған былар.

Аҙаҡ инәйебеҙ:

- Беҙҙең ызнакум һәйбәт кеше ул. Теләһә кемгә, теләһә нимә һөйләп йөрөмәҫ. Ҡайтҡас, бабайға аңлатырмын, - тип күңелен тынысландырған.

## Быргадир

Элек беҙҙең заманда рәсми рәүештә башта октябряттар, унан пионерҙар, комсомолдар сафына ала торғандар ине. Комсомол сафына эләгеүе бигерәк ҡыйын ине. Унын уставын ятлап, комиссия алдында яуап бирә торғайныҡ. Шундай йыйылыштарҙың береһендә бер егеттән:

- Л.И. Брежнев кем ул? - тип һорағандар.

- Ул Мәскәүҙең быргадиры,- тигән егет.

Сөнки ул ваҡытта бәләкәй ауылдарҙа колхоздың иң юғары етәксеһе бригадир ине.

## Уҡырға, уҡырға һәм уҡырға

Шул йылдарҙа булған хәл. Бер малай мәктәптән ҡайтҡан да әсәһенә: "Ленин бабайға йән көйә", - тигән ти. "Атаҡ, атаҡ, уға нимәгә йәнең көйә?" - тип һораған әсәһе аптырап. "Һуң ул бит "Уҡырға, уҡырға һәм уҡырға!" тигән. Ул шулай тимәгән булһа, тырышып уҡымаҫ инем", - тигән.

## Тәүге дәрес

Педагогия колледжы студенттары мәктәптә практика үтеп, тәүге дәрестәр биреп йөрөгән саҡта була был хәл.

Бына дәрес башланыуҙы белгертеп, ҡыңғырау һуға. Студент ҡыҙыҡай балаларҙы сәләмләй, үҙе ныҡ тулҡынлана.

- Һаумыһығыҙ, балалар! Ултырығыҙ, ҡуяндар,- ти ҙә ҡуя абайламаҫтан.

Баҡһаң, дәрес темаһы ҡуяндар тураһында булған икән.

**Мәҙәктәрҙе еткереүсе Гөлнара ИБРАҺИМОВА. Сибай ҡалаһы.**




## "Бензин бик яман икән..."

Ғәлиә инәй гел генә арҡаһы ҡысыуға зарлана, бөтә урында, һыйыр ышҡынған кеүек, арҡаһын ышҡый ҙа тора. Бер көндө был ярты көрөшкә бензинды арҡаһына һөртә лә мейесен ағарта башлай. Ҡаҙан аҫтында ут яна, яҡын килә усаҡҡа һәм арҡаһын ут ялмай. Эзбизле ҡанат менән һуҡҡылай - файҙаһыҙ. Шунан өс ай дауаханала ятып сыға. Үҙе: "Бензин уттан яман икән, ялҡынды тартты ла алды бит", -тип көлгән була. Бер рәхәт эшләйем, тип өс ай этләнде. Ут һәм бензин көсөн шунда ғына белде ул.

## "Алһаң, законнай ал"

Йомабайҙың әбейе үлгәс, төрлө яҡтан әбей эҙләне. Мәликә: "Мине ал, тик алтын балдаҡ кейҙереп, загслап, законнай итеп кенә ал", - тимәһенме. Бабай ышанған, балдаҡ һатып алып, таныштарына барып, уларҙың шаһит булып бергә барыуҙарын үтенгән. Таныштары уға "Мәликә шаярҭҡандыр, унын ире бар бит", - тигәс, тегеһе ышанмайыраҡ торған да, кире ҡайтып киткән. Ул әле лә әбейһеҙ, Мәликә осраған һайын шаярта, тегеһе йәлп итеп ҡаса. Шаяртыу ҙа төрлө шул: йә ышандыра, йә һемәйтә.

## "Әбей кәрәкмәй"

Сәлмән 3-4 йәшкә тиклем сәңгелдәктә йоҡланы. Әсәһе бәүетә башлаһа: "Әбей кәрәкмәй, бабай бәүетһен", - тип бәлә һала, атаһын таптыра. Атай бәүетһә, йоҡлап китә. Малай донъя рәхәтен бәләкәйҙән үк татыған, башлы булған. Хәҙер үҙе бабай, ысынлап та бик аҡыллы, уңған кеше. Булыр бала бишектән үк билдәле була шул. Күргән һайын "бабай бәүетһен" тип көлөшәләр тиңдәштәре менән.

## Колбаса еҫе килә

Нисәнсе йылдарҙа икән, кибеттәрҙә колбаса бөттө, шуға ла был ризыҡҡа сираттар оҙайҙы, уны "аҫтан" һатыу башланды. Шәмсекамал еңгә Магнитҡа барғанда аҙыраҡ колбаса алыу бәхетенә өлгәшә. Ғаиләгә бүлһәң, етмәй. Соланға йәшереп ингән дә, сыҡҡан һайын ҡабымлай икән был. Ире Ғәйнислам тәмле еҫте тиҙ тоя һәм: "Кәләш, һин соланға сығып килгән һайын тәмле колбаса еҫе килә", - тип, еңгәне ҡосаҡлап үбә, еҫкәй икән. Еңгә эстән генә һөйөнә, ғүмере иркәләмәгән ире наҙлай бит үҙен. Дөрөҫ икән, бер һөйгән арҡаһында һөймәгәнде лә һөйәһең. Колбаса шулай уларҙың мөхәббәтен яңыртҡан.

## Брәүилнә үлгән үҙе

Ишмырҙа бабайҙарға Белореттағы знакумы килеп төшә. Һәүетемсә генә, бишбармаҡ ашап, ҡоротлап һурпа, үләнле сәй эсеп, кис ултыралар. Тыныс ҡына йоҡларға яталар. Иртән торһалар, знакум үлеп ята ти. Ишмырҙа ҡарт мәйет тирәһендә уралана, үҙе: "Астан үлгән, тиһәң, кистән арыу ғына ашаны, ҡарт түгел - паспорты биш йыллыҡ, ризыҡһыҙ тиер инең - сумкаһында ике буханка икмәге бар, ауырыу ҙа түгелдер - брәүилнә ятып үлгән", - тип һөйләнә. Аҙаҡ асыҡланыуынса, знакумдың йөрәге сирле булған, ул тибеүҙән туҡтаған һәм үлемгә сәбәп булған. Һәр эш-хәлде кеше үҙенсә баһалай инде. Әле лә берәйһе вафат булһа, "Брәүилнә үлгәнме?", тип мәрәкәләшәләр, һағыш ҡатыш, әлбиттә.

## Тыныс йоҡо юҡ

Бәҙерниса апай гел генә йоҡоһоҙлоҡтан зарлана торғас, дауаханаға килеп ята, үҙе көнө-төнө йоҡлай. Күршеһе хәл белергә килгәс: "Әлегә үҙгәреш юҡ, тик тыныс йоҡларға бирмәйҙәр, уята ла укол һалалар", - тип яуаплай. Күршеһе аптырап: "Бына һиңә йоҡоһоҙлоҡ",- тип ҡуя.

## Һыҙҙыҡ

Бер көндө черчение уҡытыусыһы ике класты бер юлы уҡыта: әле береһенә, әле икенсеһенә инеп йөрөй. "А" класындағылар: "Ағай, һыҙайыҡмы?" - тип, кинәйәләп һорай уҡытыусынан. Уны-быны уйламаған уҡытыусы: "Һыҙығыҙ, һыҙ", - тип, икенсе класҡа китә. Класс шым ғына дәрестән "тая". Иртәгәһен был турала һүҙ сыҡҡас, уҡыусылар: "Ағай, үҙегеҙ һыҙырға ҡуштығыҙ бит", - тимәһендәрме. Күмәкләп көлөшәләр. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге ҡайһы берҙә "файҙаға" тейә шул.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

**Милли театр сәнғәте үҫешен ситтән булһа ла күҙәтеп барғандар һиҙәләр, һуңғы осорҙа республика театрҙары сәхнәләрендә бик шәп, талантлы, үҙенсәлекле һәм көтөлмәгән ролдәр ижад итеүсе йәш ир-егет актерҙар күбәйә бара. Хатта тап ошо бер быуын актер егеттәр бөгөнгө башҡорт мәҙәни донъяһын үҙ ҡулында тотоп тора, тиһәк тә яңылышмаҫбыҙ: улар концерттар, йәштәр өсөн башҡа төрлө күңел асыу саралары ойоштора, үҙҙәрен һәләтле алып барыусы итеп тә таныта, радио-телевидениела ла эшләп өлгөрә. Бөгөнгө геройыбыҙ Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры актеры Фәнил ТОЛОНҒУЖИН да шундайҙар рәтенән. Күптәр уны быйыл яҙ тамашасы иғтибарына тәҡдим ителгән "Алмабикә" фильмы аша ла яҡшы таный. Театр һәм кино актеры араһында айырма бармы? Милли театрҙың йөҙөн ниндәй спектаклдәр билдәләргә тейеш? Йәш актер менән әңгәмәбеҙ ошолар хаҡында.**

# ТИКТОРМАҪЛЫҒЫ...

## уңыш яулау ҡоралы



### "Етмеш ике партизан"

Мин мәктәптә уҡыған саҡта географияны бик яраттым һәм шуға ла юғары белемде ошо йүнәлештә алырға теләй инем. Артист булырмын тигән уй ике ятып бер төшөмә инмәне лә булманы. Иң ҡыҙығы, туғандар араһында бер кем дә, хатта олатай-өләсәйҙәрем, атай-әсәйем дә йырламай ҙа, бейемәй ҙә, тигәндәй. Исмаһам, береһе гармунда уйнай белһә икән! Ә беҙ, бер туған апайым Айгөл һәм мин, сәнғәт юлынан киттек. Апайым профессиональ бейеүсе, Әбйәлилдә йәшәй, еҙнәм Илдар менән ике ҡыҙ үҫтерә. Артист һөнәренә һөйөү уятыуҙа апайымдың да өлөшө барҙыр, сөнки атай менән әсәй гел эштә булыу сәбәпле, мин башлыса апай тәрбиәһе алған кеше. Апайыма эйәреп, Байым ауылы мәҙәниәт йортоноң "Шатлыҡ" балалар бейеү ансамбленең репетицияларына ла йөрөргә тура килде. Мәҙәниәт йорто директоры, ансамбль етәксеһе Римма Вәли ҡыҙы Таһирова йәйләп мине сәхнәгә ылыҡтыра башланы. Тәүге тапҡыр сәхнәгә дүрт йәштәр тирәһендә сыҡҡанмын. Әсәйем һөйләүе буйынса, 1 Май алдынан уларҙы эштән иртәрәк бушатып, байрам концертына ебәргәндәр. Бер мал резина итектәрҙе шапылдатып, сәхнәгә мин килеп сыҡҡанмын һәм "Етмеш ике партизан" бәйетен һөйләгәнмен. Баҡтиһәң, гел апайым эргәһендә йөрөп, уның мәктәп программаһы буйынса ятлаған шиғырҙарын да ятлағанмын һәм Римма Вәли ҡыҙы саҡырғас, концертта шуны һөйләп ишеттергәнмен икән. Аҙаҡтан бейеү менән мауыға башланым. Әйткәндәй, был шөғөлдә ифрат яратам, көндәлек тормошта ла бейеүсе күңелем гел елкенеп кенә тора. Ун йәшкә тиклем йырлап та йөрөнөм, тик аҙаҡтан ояла башланым. Мәктәптә уҡығанда театр түңәрәгендә лә шөғөлләндем һәм төрлө ролдәр башҡарыу миңә ныҡ окшай ине. Бына шул рәүештә мин сәхнә малайы булып киттем һәм йөрәгемдә сәнғәткә һөйөү уятҡаны өсөн Римма Вәли ҡыҙына рәхмәтлемен.

Мәктәпте тамамлағас, БДУ-ға килеп, ниндәй документтар кәрәклеген белешеп йөрөнөм дә, Өфө дәүләт сәнғәт академияһына инеп кенә сығырға булдым. Миңә бар актерҙар ҙа Фидан Ғафаров һымаҡ костюм-салбар кейеп, башын юғары тотоп, дәрәжәле генә баҫып йөрөйҙәр һымаҡ тойола ине. Театр факультетына килеп индем дә, шаҡ ҡаттым: матур колонналар менән биҙәлгән холда кемдер маймыл, кемдер бесәй булып уйнай, кемдер нимәлер уҡый, кемдер илай. Иң ҡыҙығы, барыһы ла джинсы салбарҙа, төрлө-төрлө сағыу күлдәктәрҙә. Бәй, улар араһында мин генә Ғафаров һымаҡ - костюм-салбарҙа. Бөтөнләй икенсе донъяға килеп эләккән кеүек булдым һәм ошо тормош менән үҙемдең дә йәшәп ҡарағым килде. Минең теләгемә атайым менән әсәйем дә ҡаршы булманы һәм шул ваҡыттан алып мин "Сәнғәт" тигән бик тә мөғжизәле донъяның яңынан-яңы биттәрен асам.

### "Үҙем яҙған яҙмыш"

Беҙҙең курс махсус рәүештә Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры өсөн әҙерләнде. Стәрлетамаҡ - ул тәүгe профессиональ театр барлыҡҡа килгән ҡала. Ошо тарихи ваҡиғаның да шауҡымы бармы икән, бында бик юғары мәҙәниәтле, үтә нәзәкәтле, үҙ сәхнәһенә тоғро тамашасы йәшәй. Стәрлетамаҡ башҡорт театрының барлыҡҡа килеүенә егерме йыл ғына булһа ла, уның үҙенә генә хас ҡабатланмаҫ милли йөҙө бар. Был театр тағы ла шул яғы менән үҙенсәлекле: ул бер ҡасан да тапалған юлдан китмәй, сәнғәт донъяһында барлыҡҡа килеп торған төрлө йүнәлештәрҙе тойоп, тәжрибәләр аша ижад итә.

Беҙҙең был театрҙа уйнаған иң тәүге спектаклебеҙ Мостай Кәримдең "Ҡыҙ урлау" комедияһы (режиссеры Рөстәм Хәкимов) булды. Әле сәхнәгә ныҡлап аяҡ баҫып та өлгөрмәгәйнек, шулай ҙа миңә унда Илфир Баймырҙин менән дублер булып, Шәкүр ролен уйнарға тура килде. Илфир тәжрибәле актер, шуға ла геройымды мин уға эйәреп кенә эшләнем һәм сәхнәгә лә бер нисә тапҡыр ғына сығып өлгөрҙөм. Бына шунда мин ролдәрҙең, уйнаған геройҙарыңдың ике төркөмгә - һинеке йәки һинеке түгелгә бүленгәнлеген аңланым. Күңелемдә үҙ-үҙем менән ҡөнәрәтһеҙлек һәм был роль минеке түгел, тигән тәьҫорат ҡалды. Ә мине актер булараҡ асҡан роль итеп Александр Вампилов пьесаһы буйынса ҡуйылған "Мөғжизәле осрашыу" спектаклендәге Васенька ролен иҫәпләйем. Бында, һис шикһеҙ, спектаклдең режиссеры Олег Закир улы Хановтың да йоғонтоһо бар. Бик яратып, үҙ итеп уйнаным мин уны. Хәҙер инде бындай ролдәр ҙә күбәйә бара, шулай ҙа күңелемә яҡкан, үҙемдеке булған ролде мин әлегә уйнамағанмын һәм ул киләсәктә мотлаҡ буласаҡ, тип уйлайым.

Һәр милли театрҙа уның йөҙөн билдәләүсе спектаклдәр ҙә булырға тейеш. Режиссер Азат Йыһаншиндың Мәрйәм Бураҡаева әҫәре буйынса ҡуйылған "Үҙем яҙған яҙмыш" романтик драмаһын шундайҙар иҫәбенә индерәм. Бер актлы ғына булһа ла, тамашасылар күңелендә шундай ыңғай тойғолар уята алды ул. Башҡорттоң рухын, көсөн, дәртен, намыҫын, йолаларын, ҡыҫҡаһы, булмышын һәм асылын сағылдырған әҫәрҙән бынамын тигән спектакль килеп сыҡты. "Үҙем яҙған яҙмыш" менән Төркиәлә уҙған "Мең һулыш - бер тауыш" III төрки телле халыҡтарҙың халыҡ-ара театрҙар фестивалендә ҡатнашып, дипломант исемен яуланыҡ. Был фестивалдә беҙҙең театрҙан тап ошо спектаклдә ике тапҡыр уйнарға һорауҙары күп нәмә тураһында һөйләй. Хәрәкәттәргә бай булғанлыҡтан, хатта башҡорт телен яҡшы белмәгән кеше лә уны тәржемәһеҙ аңлай һәм яҡшы ҡабул итә.

### "Алмабикә"

Сәхнә актеры булһам да, мине хәҙер "Алмабикә" фильмы аша күберәк танбйҙар. Илһам роле мине киңерәк тамашасыға сығарыусы роль булды, тип тә әйтә алам. Әлбиттә, сәхнәлә спектакль уйнау һәм киноға төшөү - икеһе ике төрлө әйбер. Сәхнәгә сыҡҡанда һин бар күңелеңде биреп уйнарға тейешһең, сөнки һиңә ул көндө башҡаса мөмкинлек бирелмәйәсәк. Кинола нимәлер оҡшамай икән, киренән төшөрөү форсаты бар. Фильм тамашасыға барып еткәнсе, шымартылып, уйланылып, хаталар өҫтөндә эш эшләнгән була, ә театрҙа бер төрлө спектаклде көн һайын бер төрлө итеп уйнап булмай. Ҡайһы көндә ролең үтә уңышлы була, ҡайһы көндә үҙеңә лә оҡшамай, тигәндәй.

Камера алдындағы беренсе эшем студент саҡта уҡ, "Далан" төркөмөнөң "Әйһәйлүк" йырына төшөрөлгән клипта булғайны. Айгиз Ғәбдуллин менән шул осорҙан бирле ижади ептәр бәйләй, үҙебеҙ ауылдаш ҡына түгел, хатта бер урамда йәшәйбеҙ, шуға "Алмабикә" фильмына төшөргә шунда уҡ ризалыҡ бирҙем. Башҡорт кинолары аҙ булыу сәбәпле, был проект тамашасы өсөн дә һынау булды. Кеше ҡабул итә алырмы, уларға оҡшармы, тигән уйҙар беҙҙе бер минутҡа ла ташламаны. Фильм тамашасыға оҡшаһын өсөн уның нигеҙендә тамашасы белгән, ул үҙе үткән тарих һәм, әлбиттә, мөхәббәт ятырға тейештер, тип уйланыҡ.

Театрҙа партнерҙарына шул тиклем өйрәнеп бөтәһең, хатта кемдең, ҡайһы ерҙә ниндәй хәрәкәт яһаясағына тиклем алдан һиҙеп тораһың. Ә киноға төшкәндә һин үҙең быға тиклем таныш булмаған партнерҙар менән уйнайһың. Минең өсөн фильмда төшөүҙең тағы ла бер ҡыҙыҡлы яғы ошо булды. Төп героиняны уйнаясаҡ Азалия Ялмырҙина менән тәүҙә нисектер аралашыу килеп сыҡманы. Өфө ҡыҙы, "Һылыуҡай" студияһы гүзәле, "Һомай" төркөмө солисы һәм миңә уның менән уйнарға кәрәк буласаҡ, был үҙен бик һауалы тотор инде, тигән фекерҙә ҡалдым. Ә Азалия мине күргәс, актер, имеш, башлана инде хәҙер пафослы һөйләшеүҙәр, эре генә баҫып йөрөүҙәр, тип уйлаған. Аҙаҡтан дуҫлашып киттек, уртаҡ дуҫтарыбыҙ барлығы асыҡланды, ни тиһәң дә, икебеҙ ҙә бер сәнғәт донъяһында ҡайнап йәшәйбеҙ. Сибай дәүләт башҡорт драма театрынан Динис Нурғәлин менән дә таныш түгел инем, әммә уның диплом эштәрен күргәнем бар ине. Әйткәндәй, яңы партнер менән мөхәббәт тарихы уйнауы ла еңелерәк. Бында бар хәрәкәт тә шул тиклем ышандырырлыҡ килеп сыға, сөнки һин уйнамайһың, ә уны ысынлап өйрәнәһең, яулайһың, йәғни, шул ваҡиғалар менән йәшәй башлайһың. Фильм ун көн эсендә төшөрөлдө, сөнки мин ауылға бесәнгә тип кенә ҡайтҡайным. Һиҙеүегеҙсә, атайға бесән эшләшеп булманы, шулай ҙа был көндәрҙе мин һаман да йылы хистәр менән иҫкә алам.

Геройым Илһам менән уртаҡ яҡтарыбыҙ ҙа юҡ түгел. Мин, ысынлап та, ҡайһы бер саҡта уйламайыраҡ әйтеп ебәрәм, ҡайһы бер саҡта артыҡ шаярып китеп, кешене үпкәләтһәм, шунда уҡ ғәфү үтенә башлайым. Холҡомда ниндәйҙер бер ҡатлылыҡ бар. Ләкин ул персонаж мин түгел, уның ҡайһы бер ҡылыҡтарын уйнағанда, килешмәйенсә, кит инде, егет кеше шулай эшләйме икән, тип уйлап та ҡуя инем. Егет кеше һәр ваҡытта ла егет булып ҡала белергә тейеш. Ҡайһы берәүҙәр, тормош ауырлыҡтары, әрме кешенән ир яһай, тигән булалар, был дөрөҫ түгел, ысын ир булып тыуырға кәрәк. Ә ир кешегә хас сифаттар ғаиләлә тәрбиәләнә. Үҙем атайымдан ысын ир-егет өлгөһө алып үҫтем, тип уйлайым. Минең башымдан һыйпап, әпәүләп торор өсөн әсәйем бар, ә атайым иркәләтеп ултырманы, эшкә генә түгел, ә тормошто, кешеләрҙе аңларға ла өйрәтте. Бер ҡасан да ниндәйҙер кәртәләр ҡуйманылар, ирек тә бирҙеләр, шуға ла мин үҙемде ниндәй ҙә булһа өлкәлә һынап ҡарарға ҡурҡмайым.

### Холоҡ - ул яҙмыш

Тәбиғәтем менән үтә тиктормаҫ кешемен. Тик ултыра алмайым, миңә ҡайҙалыр, нимәлер эшләп йөрөргә кәрәк. Ошо сифатым миңә, беренсенән, студент сағымда уҡ ата-әсәйем елкәһенә артыҡ ауырлыҡ һалмайынса уҡырға мөмкинлек бирҙе. Икенсенән, үтә тынғыһыҙ булыуым арҡаһында мин үҙемдең һәләтемде төрлө яҡлап үҫтерә алдым. Беренсе курстан алып концерттарҙа алып барыусы, "Тамыр" студияһында актер булып та, төнгө клубтарҙа ла эшләргә тура килде. Быларҙың барыһы ла миңә уҡырға ҡамасауламаны, академияны ҡыҙыл дипломға тамамланым. Академияла пластика, сәхнә хәрәкәте, сәхнә һуғышы, фехтование, бейеү буйынса дәрестәр оҡшай торғайны. Шуға ла хәҙер мин каскадер булып, трюктар эшләргә хыялланам. Әгәр башҡорт фильмдары шундай кимәлгә етеп, каскадерҙар талап ителә башлаһа, мин генә түгел, тағы күп актерҙар был һөнәрҙә лә үҙ итер ине. Ғөмүмән, сәхнәлә һүҙ генә түгел, матур хәрәкәттәр ҙә булырға тейеш. Ул тамашасыға ла оҡшай, пластикаһы яҡшы булған актерға ҡарап ултырыуы ла яҡшы. Шулай уҡ сәхнәлә ниндәйҙер эксперименттар эшләүҙән ҡурҡмаҫҡа кәрәк, сөнки уның 10 проценты ғына уңышлы булған осраҡта ла, үҙеңде актер булараҡ асыу, үҫтереү өсөн бынамын тигән тәжрибә тупланасаҡ. Театрҙың тәғәйенләнеше күңел асыу сараһы ойоштороуҙа түгел бит, унда шул уҡ тормош ҡайнай. Ошо фекергә һин тамашасыны ла ышандырырға тейешһең. Бының өсөн тәбиғәт биргән һәләт кенә етешмәй, тырышлыҡ та кәрәк. Шуның өсөн дә актер гел эҙләнеү, үҫеү юлында булырға тейеш, шунһыҙ был һөнәрҙә камиллыҡҡа өлгәшеп булмайҙыр, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ниндәй генә осорҙа йәшәмәйек, йәмғиәт менән сәләмәт, йәш һәм энергияны ташып торған кешеләр идара итә. Кемдер быны йәшлек максималлеге, тип атап, йәш саҡта беҙ ҙә шулай инек, тиер. Әгәр ҙә был ыңғай энергия ниндәйҙер изге эштәр башҡарыуға, маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуға, иҫке проблемаларҙы яңыса ҡараш менән хәл итеүгә йүнәлтелә икән, йәшлек максималлеген көслөләр өлөшөнә яҙған өҫтөнлөк итеп ҡарарға ла мөмкин бит. Һәм тағы ла. Ололар, бөгөнгө заман йәштәренә инфантиллек хас, улар "идеаль герой"ҙың йыйылма образын эҙләү менән генә мәшғүл, тип әйтергә ярата ла, минеңсә, хәҙерге йәштәрҙә кемгәлер оҡшарға тырышыу күренеше бөтөнләй юҡ. Был егеттәрҙең уңыш сере, бәлки, шундалыр ҙа?**

Ләйсән НАФИҠОВА
яҙып алды.

✓ *Мин дә килен булып төшкәс, ҡәйнәм: "Килендәшең менән бейә еленендәй икәү генәһегеҙ. Алама һүҙ әйтешеп, ауыҙығыҙ түмен ебәрмәгеҙ, үҙ-ара татыу булығыҙ, ирҙәрегеҙҙең күңел тыныслығы юғалмаһын", - тине.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БУЙЫ ОҘОНОРАҠ КЕШЕЛӘР... ышаныcты тиҙерәк яулай

■ Кешенең насар елләтелгән бүлмәлә кислород етешмәүҙән иҫнәй башлауы күптән билдәле. Шулай ҙа иҫнәү булдырыусы сәбәптәр әлегә тиклем асыҡланып бөтмәгән. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, йоҡо килгәндә, арығанда баш мейеһендә тотҡарланыу процестары ярһыу процестарына ҡарағанда өҫтөнлөк ала бара. Һөҙөмтәлә, организмдың ҡайһы бер функциялары, шул иҫәптән һулыш алыу ҙа тотҡарлана. Ул һирәгерәк, өҫтөнөрәк була бара, шуға ла ҡанда углекислота һәм матдәләр алышыныуҙың башҡа продукттары йыйыла. Баш мейеһенең һулыш алыу үҙәктәренә тәьҫир итеп, улар иҫнәү тыуҙыра. Әйткәндәй, иҫнәү башҡа кешегә йоғоусан. Ул көләү кеүек үк, күршегеҙгә шунда уҡ йоғоп, ул да иҫнәй башлаясаҡ.

■ Мадрид университеты ғалимдары һуғандың ҡабығында сәләмәтлек өсөн файҙалы матдәләр күплеген асыҡлаған. Һуғандың ҡабығы һәм һоро төҫтәге өҫкө ҡатламы флавоноидтарға, ә беҙ ҡырҡып ташлаған ғәҙәтләнгән аҡсыл өлөшө көкөрт берләшмәләре һәм фруктоза полимерҙарына бай. Шуға ла ғалимдар аҙыҡ әҙерләгәндә уны кверцетин кеүек фенол берләшмәләре һәм флавоноидтар менән тулыландырыу өсөн һуғандың һоро ҡатламын да ҡулланырға тәҡдим итә. Был йөрәк-ҡан тамырҙары, ашҡаҙан, эсәк яман шеше, икенсе типтағы диабет, һимереү кеүек ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк. Фенол берләшмәләренең канцероген процестарҙан һаҡлауы ла билдәле.

■ Америка психологтары белдереүенсә, кешенең лидерлыҡ һәләттәре уның буй оҙонлоғона бәйле. Бынан тыш, мәҙәниәт һәм тәрбиә кимәленә ҡарамайынса, бар кешеләр ҙә оҙон буйлыларға тиҙерәк ышана икән. Ғалимдар миҫал итеп Барак Обаманы килтерә. Буйы 185 см булған сәйәсмән үҙенән 13 сантиметрға бәләкәйерәк булған Джон Маккейнды һайлауҙар ваҡытында үтеп китә. Техас штатының технологик университеты ғалимы Грег Мюррей фаразлауынса, 2012 йылдағы һайлауҙарҙа милли партия кандидаты Митт Ромниға халыҡ күберәк тауыш бирәсәк, сөнки ул Обамаға ҡарағанда 3 сантиметрға оҙонораҡ. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, боронғо кешеләр башлыҡтар һәм Аллаларҙың фигураларын ябай кешеләр фигураларына ҡарағанда оҙонораҡ итеп һүрәтләгән. Студенттар араһында үткәрелгән һорау алыуҙарҙа 64 процент осраҡта лидерҙар ябай кешеләрҙән оҙонораҡ булып сыҡҡан.

■ Торонто (Канада) университеты ғалимдары белдереүенсә, сит телдәр өйрәнеү Альцгеймер ауырыуы билдәләре барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай. Тикшереү барышында ғалимдар был ауырыуҙың беренсе билдәләре булған пациенттарға томографик тикшеренеү үткәрә. Экспериментта ҡатнашыусыларҙың барыһының да белем кимәле бер тигеҙ була, әммә уларҙың яртыһы сит телдә иркен һөйләшә, икенсе яртыһы бер ниндәй ҙә сит тел белмәй. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, сит тел белгән кешеләрҙә Альцгеймер ауырыуы билдәләре һуңыраҡ барлыҡҡа килә. Быны ғалимдар шулай аңлата: кеше бер телдә аралашыуҙан икенсеһә күсеп, даими рәүештә мейе әүҙемлеген һаҡлап ҡала. Шулай уҡ артыҡ ауырлыҡ, юғары ҡан баҫымы, диабет, депрессия, тәмәке тартыу, физик һәм аҡыл күнекмәләре булмауы аҡыл зәғифлегенә килтерә.

АҒИНӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ

**Аҡыл - ул аҡыллы хәбәр һөйләү түгел, ә үҙ аҡылыңды үҙең тота белеү. Ошо хәҡиҡәткә мин йәшәгән һайын нығыраҡ инана барам һәм шуның өсөн дә тормош һабаҡтарын халыҡ араһынан эҙләйем, үҙ аҡылын үҙе тотҡандар менән аралашырға ынтылам. Әле яратҡан гәзитебеҙ уҡыусыларына халҡыбыҙ аҡылын быуындарҙан-быуындарға еткереүсе ағинәйҙәрҙең береһе тураһында әңгәмә тәҡдим итәм. Әңгәмәлә һүҙ барасаҡ Сафия апай Насретдинова тураһында һөйләшеү өсөн уның өлкән ҡыҙы Мәхмүзә менән кесе килене Зөлфиәне түңәрәк ҡорға саҡырҙыҡ.**

# ҠӘЙНӘЛӘР ИНСТИТУТЫ БУЛҺА...

## ҡәйнәмде ректор итеп күрергә теләр инем

**➔ Сафия апайҙың балаларының ҡайһыныһы менән генә һөйләшһәк тә әңгәмәбеҙҙең фәһемле килеп сығырына иманым камил. Бөгөн иһә һеҙҙең менән фәһемле һөйләшеүгә өмөт итәбеҙ.**

**Зөлфиә.** Мин Сафия һәм Кәлимулла Насретдиновтарҙың кесе улы Сәғиткә кейәүгә сығып, был йортҡа аяҡ баҫҡас, килендәшем Зөһрә: "Зөлфиә, һин шундай йортҡа төштөң: бында етешмәгән яҡтарыңды ла, яңылышлыҡтарыңды ла күрмәҫкә тырышалар. Ҡәйнәмдең аҡылы арҡаһында һин үҙ етешһеҙлегеңде үҙең күрерһең", - тигәйне. Тәүге көндәрҙә үк тойҙом мин быны. Ысынлап та, яңылышлыҡтарым өсөн ҡәйнәм кәмһетерлек һүҙ әйтеү түгел, күҙ ҡарашы менән дә һиҙҙермәне. Ә белмәгән эштәремде үҙ өлгөһө менән ипле генә өйрәтте, аҡылын мәҡәлдәр аша ғына зиһенемә һеңдерә барҙы. Мин шул тиклем рәхмәтлемен ҡәйнәмә.

**Мәхмүзә.** Атайым көнө-төнө эштә булғас, беҙҙе бағыу, тәрбиәләү әсәйем иңенә төштө. Әммә бер ваҡытта ла уфтанғанын, беҙгә асыуланып һүҙ әйткәнен, атайыма үпкәләгәнен ишетмәнем дә, тойманым да. Мин, баш бала булғас, улар тормошо күҙ алдымда булды бит инде. Бала табыу - әсәй булыуҙың башы ғына. Уны кеше итеп тәрбиәләү иһә - ысын Әсәй булыу ул, тигән яуаплылыҡ һалды барыбыҙҙың дә зиһененә.

**Зөлфиә.** Мин дә ҡәйнәмдән иң элек яуаплылыҡ тойғоһона өйрәндем. Балаң яҙмышы өсөн яуаплылыҡ - иң оло яуаплылыҡ, тигән аҡылын тәүге көндәрҙән башлап күңелемә һала барҙы ул.

**Мәхмүзә.** Әсәйемдең тәрбиә алымдары - тотош тормош һабаҡтары ул. Уны яҙа барырға кәрәк тә бит...

**Зөлфиә.** Ғөмүмән, ҡәйнәмдән сығып ҡына әйткәндә лә, халҡыбыҙҙа иҫ китмәле тәрбиә алымдары бар. Әле бына фэн-шуй буйынса курстар үткәрәләр. Мин шул курстарҙа алған белемде ҡәйнәмдең өйрәткәндәре менән сағыштырып ултырам - бөтөнөһө лә тап килә. Ә ни эшләп башҡорт тәрбиә алымдарын ошондай тәжрибәләрҙән өйрәнмәҫкә? Ҡәйнәмдең һәр һүҙе аҡыл, һәр фекере халыҡ мәҡәле менән раҫланған. Мин ауылда "Тормош һабаҡтары" дәрестәре алып барғанда ҡәйнәмдең мәҡәлдәрен йыш ҡуллана торғайным.

**Мәхмүзә.** Әсәйемдең мәҡәлдәре генә түгел, сағыштырыуҙары ла ҡыҙыҡ бит ул. Күҙ алдына баҫа ла ҡуя. Мәҫәлән, туҡһанынсы йылдарҙа, үҙгәртеп ҡороуҙар, тип сыр-сыу килеп йөрөгән саҡта әсәйем, ил яҙмышы өсөн нык борсолоп: "Илебеҙ халҡы көтөүсеһеҙ ҡалған мал кеүек булып ҡалды инде. Тырым-тырағай таралышып, үҙ көндәрен үҙҙәре күреп йөрөгән һымаҡтар. Аттар таҙа һыу, утлар үлән эҙләп китте, кәзәләр мөгөҙө һыйған ергә инергә тырыша, һарыҡтар өйөрө-өйөрө менән әле бер нәмәнән, әле икенсе нәмәнән өркөп бер урынға өйөлөштө", тигәйне әсенеп...



Сафия апай балалары менән.

**Зөлфиә.** Мин дә килен булып төшкәс, ҡәйнәм: "Килендәшең менән бейә еленендәй икәү генәһегеҙ. Алама һүҙ әйтешеп, ауыҙығыҙ түмен ебәрмәгеҙ, үҙ-ара татыу булығыҙ, ирҙәрегеҙҙең күңел тыныслығы юғалмаһын", - тине. Ысынлап та, күҙ алдына килтерерлек кенә сағыштырыу таба ла ҡуя шул. Ул тиклем мәҡәлдәрҙе, сағыштырыуҙарҙы ҡайҙан белә лә, нисек итеп хәтерендә тота тиерһең...

**Мәхмүзә.** Хәтере иҫ китмәле шәп уның. Шәжәрәләр төҙөү башланғас, ауылыбыҙҙа байтаҡ кешеләр туғанлыҡ тармаҡтарын әсәйемдән килеп һораштылар.

**Зөлфиә.** Үҙебеҙ ҙә туғанлыҡ ептәрен ҡәйнәмдән һорашып яҙҙыҡ. Ҡайным яғынан туғыҙ быуынды яттан әйтте. Барыһының да исемдәре менән хәтерләй. Әле ҡәйнәм хәтерләүе буйынса төҙөлгән шәжәрәбеҙҙә Сәғит һигеҙенсе, Айҙарыбыҙ - туғыҙынсы быуын. Шулай төҙөнөк шәжәрәбеҙҙе. Туғандарға тараттыҡ. Һәр береһе тағы өҫтәй бара.

**Мәхмүзә.** Шәжәрә төҙөү башланғас, бик ҡыуанды әсәйем. "Бына хәҙер туғандарын белеп, ҡәҙерләп кенә йәшәрҙәр. Был донъяла кеше бер-береһенә ҡунаҡ ҡына бит ул, туған ҡәҙерен һанлау - оло тәрбиәлелек", тип, башҡалар өсөн ҡыуанғанын белдерҙе.

**Зөлфиә.** Беҙгә лә ул фекерҙе йыш ҡабатлай ҡәйнәм. Бер-берегеҙ өсөн ҡәҙерле булығыҙ, тигән һүҙҙәрен мин үҙем дә һәр саҡ ҡабатлайым. Был һүҙҙәр - минең өсөн йәшәү маҡсаты һымаҡ. Ҡәйнәләр институты булһа, мин унда ҡәйнәмде ректор итеп күрергә теләр инем. Эй, аҡыллы ҡәйнәләр тәрбиәләнер ине унда.

**➔ Һин ҡәйнәң институтында нисә йыл һабаҡ алаһың инде?**

**Зөлфиә.** Уның менән бергә ун өс йыл йәшәнем. Ҡайным иҫән саҡта дүрт йылдан ашыу йәшәп ҡалдым. Йәмғеһе, килен булып төшкәнемә егерме йыл. Әле инде беҙ Өфөлә йәшәйбеҙ. Ҡәйнәм алты балаһының береһенә лә күсеп барырға теләмәй. Атайығыҙ йәшәгән нигеҙҙән китмәйем, ти. Йыш ҡайтабыҙ. Уға күңел тартылып, һөйләшке килеп тора.

**Мәхмүзә.** Хәҙер инде үҙебеҙ күптән өләсәй, олатай булып бөткән балалар бит инде беҙ, ә барыбер ураған һайын әсәйҙән кәңәш-төңәш алып, уй-кисерештәребеҙ менән уртаҡлашып торабыҙ.

**Зөлфиә.** Мин, уҡытыусы булараҡ, шуға иғтибар итәм: ҡәйнәмдең балалары, ейән-ейәнсәрҙәре шул тиклем татыуҙар, улар барыһы ла бер һүҙҙән. Олоно оло итә, кесене кесе итә беләләр. Барыһы ла үҙ урынын, үҙ тәғәйенләнешен белә. Һин былай ит, һин тегеләй ит, тигән йомошауҙар юҡ был ғаиләлә. Һәр кем үҙе белә, үҙе эшләй. Көндәлек тормошта ла, ҡунаҡта ла, шатлыҡта ла, ҡайғыла ла. Иң нык күҙгә ташланғаны - барыһы ла ығы-зығыһыҙ эшләнә.

**➔ Тимәк, Сафия менән Кәлимулла Насретдиновтарҙың балалары белемдәре менән генә түгел, тәрбиәле булыуҙары менән дә юғары, тигән төшөнсәгә тап килә. Бер юлы әйтеп үтәйек. Сафия апайҙың алты балаһы ла юғары белемле. Оло ҡыҙы Мәхмүзә - медицина фәндәре докторы, профессор. Динара - БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Фәйрүзә - медицина университетында лаборатория мөдире, БР-ҙың атҡаҙанған медицина хеҙмәткәре, Вәкилә - Ян-**



## 14 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 1-я серия
22.25 "Судьба на выбор"
23.30 "Познер"
00.30 Ночные новости
00.40 "Форс-мажоры", 8-я серия
01.35, 03.05 "Братья блюз". Музыкальная комедия
03.00 Новости
04.05 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 " Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 180-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 210-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 26-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 5-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Сироты". Драма
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное произшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
21.30 "Пятницкий". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов". Остросюжетный сериал
04.55 "Сыщики". "Я убил свою жену". Детективный сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 00.00 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.15 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырһаҡ"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 Документальный фильм**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.05 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 Художественный фильм**
**21.00 "Следопыт"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
**00.30 "Поет Светлана Хакимова"**

## 15 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
07.05 "Выборы-2011" (по окончании - телеканал "Доброе утро")
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Выборы-2011"
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 2-я серия. Биографическая драма
22.30 "По ту сторону света"
23.30 Ночные новости
23.55 "terra nova", 8-я серия
00.50, 03.05 "Последний герой боевика". Боевик
03.00 Новости
03.15 "Туннель смерти"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 181-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 211-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 27-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 6-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Честный детектив"
02.40 "Горячая десятка"
03.45 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
21.30 "Пятницкий". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Дни романтики". Сериал
00.35 "ГРУ. Тайны военной разведки"
01.30 "Кулинарный поединок"
02.30 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов". Сериал
04.55 "Сыщики". "Долгая ночь мертвеца"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**17.00 "Взгляд без слов"**
**18.30 Новости "(на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 Художественный фильм**
**20.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция. В перерывах: Новости**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 Поет Нажия Аллаярова**

## 16 НОЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
07.05 "Выборы-2011" (По окончании - телеканал "Доброе утро")
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Выборы-2011"
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 3-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.55 "Убийство", 8-я серия
01.05 "Город призраков". Комедия
03.00 "Новости"
03.05 "Жажда скорости"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 182-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 28-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". "Воровская кровь". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 7-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "День животных"
04.05 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Пятницкий". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Краденое счастье"
00.35 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
01.15 "Квартирный вопрос"
02.15 "Один день. Новая версия"
02.55 "Город соблазнов". Сериал
04.50 "Сыщики". "Знание умножает скорбь..."

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 3.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Аксакал". К 90-летию народного писателя РБ Нажиба Асанбаева**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 Художественный фильм**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пора разобраться"**
**00.15 "Любимые мелодии"**

## 17 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 4-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 Ночные новости
23.55 "Подпольная империя"
01.00 "Руины". Фильм ужасов
02.40, 03.05 "Выборы"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 183-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 29-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 8-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Команда"
04.10 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Пятницкий". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Кумир к новому году"
00.35 "Женский взгляд"
01.25 "Дачный ответ"
02.25 "Один день. Новая версия"
03.05 "Город соблазнов"
05.00 "Сыщики". "Запах денег"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 Художественный фильм**
**21.00 "Глас закона"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**21.45 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Динамо" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция. В перерывах: Новости**
**00.15 "Млечный путь". Р. Бадретдинов**

## 18 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Король говорит!" Биографическая драма
23.40 "Настоящая речь короля". Док. фильм
00.40 "Американец". Криминальная драма
02.35 "Ниагара"
04.15 "Врата"
05.05 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "Мусульмане"
09.10 "С новым домом!"
10.05 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Мой серебряный шар"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 184-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 30-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала-2011. Дебаты"
23.40 "Превратности судьбы". Мелодрама
01.40 "Доктор Голливуд". Комедия
03.45 "Мой серебряный шар"
04.40 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Пятницкий"
23.30 "Казнокрады"
00.30 "Внезапная смерть". Боевик
02.35 "Город соблазнов"
04.30 "Операция под наркозом". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.45 "Автограф"**
**18.05 "Йома"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**18.55, 19.40, 20.40 Художественный фильм**
**21.00 "Профили"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "И сердца каждою струной я слышу Родину". З. Исмагилов**

## 19 НОЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Сказки Андерсена"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Андрей Мягков. И никакой иронии судьбы..."
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.20 "Розыгрыш. Лучшее"
16.00 "Простая история"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.20 "Большие гонки"
21.00 "Время"
21.15 "Болеро"
22.45 "Прожекторперисхилтон"
23.20 "Послезавтра". Фантастика
01.40 "Аквариум"
04.00 "Врата"
04.50 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1
05.10 "Расследование"
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Подари себе жизнь"
12.55 "Михайло Ломоносов. Десять новелл из жизни гения"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Сваты". Комедийный сериал
17.00 "Субботний вечер"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Бабье лето". Мелодрама
00.20 "Девчата"
00.55 "Опасный Бангкок". Боевик
03.00 "История о Гарри"
04.50 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.30 "Аэропорт". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Таинственная Россия"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
20.55 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
23.55 "Квартал". Криминальная драма
02.25 "Дорожный патруль-4"
04.20 "Кремлевская кухня"

### БСТ
**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.00 "Загадка Альбанова"**
**08.30 Мультфильм**
**09.15 "Аксакал". К 90-летию народного писателя РБ Нажиба Асанбаева**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Дело мастера"**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Взгляд без слов"**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Третий звонок". З. Атнабаева. "Прерванная судьба"**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Торпедо" (Нижний Новгород) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция. В перерывах: Новости**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.45 "Парад планет"**
**23.30 Концерт, посвященный 25-летию БХК им. Р. Нуреева**

## 20 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30, 06.10 "Испытание верности"
06.00 Новости
07.50 "Армейский магазин"
08.25 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Жизнь в служении"
11.10 "Пока все дома"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Специальное задание"
13.30 "Минута славы. Лучшее"
16.40 "Куплю друга"
18.30 "Большая разница" в Одессе"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Сумерки. Сага. Затмение". Триллер
00.15 "Полиция Майами. Отдел нравов". Боевик
02.40 "Обмани меня". Сериал
04.20 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.20 "Сладкая женщина"
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Сваты". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Сваты". Продолжение
16.15 "Смеяться разрешается"
18.05 "Стиляги-шоу с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Ночной гость". Мелодрама
23.05 "Путь Пастыря". К 65-летию Кирилла, патриарха Московского и всея Руси
23.50 "Сайд-Степ". Мелодрама
02.05 "Как только сможешь". Комедия

### НТВ
05.15 "Аэропорт". Сериал
07.00 "В поисках Франции"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Тайный шоу-бизнес"
22.55 "НТВшники"
00.00 "СССР. Крах империи"
01.00 "Банкротство". Криминальная драма
02.35 "Главная дорога"
03.10 "Дорожный патруль-4". Сериал
05.00 "Кремлевская кухня"

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Красноусольские самоцветы". Концерт**
**08.30 "Хазина"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф"**
**10.00 "Бауырһаҡ"**
**10.10 "Городок АЮЯ"**
**10.25 "Семэр"**
**10.40 "Шатлык йыры"**
**10.50 "Шэп арба"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Сулпылар"**
**11.30 "Гора новостей"**
**11.45 "Дарман"**
**12.30 Новости**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Тамле"**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Историческая среда"**
**16.30 "Внимание, дорога!"**
**17.00 "Дорога к храму"**
**17.30 "Деловой Башкортостан"**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00 "Весело живем"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Новости спорта. Итоги"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**23.00 "Вечер.com"**
**00.00 "Любимые мелодии"**

*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!*

# ШӘХЕСТӘРГӘ...

## эскелек быҒау һала

**Ҡайҙан килеп сыҡты һуң был эскелек тигән нәмә? Әллә күпме яҙмыштарҙы ҡосағына алып быуған, нисәмә кешеләге шәхес затын быҒаулаған ҡазаларҙың береһе булыр ул. Аңлатып булмаҫлыҡ ниндәй көсө бар һуң уның? Бер ниндәй аҙыкты ла тәүлектең теләһә ҡайһы мәлендә булһа ла бер туктамайынса ашап булмай. Ә химик элементтар ҡатнашмаһы - араҡыны ниндәйҙер бер ғәләмәт менән бер туктауһыҙ эсеп була һәм туймайһың. Парадокс! Әхмәр-Ғүмәр-Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китабын уҡып сыҡҡандан һуң эскелеккә ҡарата тыуған фекерҙәрем, тәҡдимдәрем менән уртаҡлашмаҡсымын.**



Күмәкләп тә еңеп булмаҫлыҡмы икән ни был афәт? Юҡ! Беҙ, кешеләр, барыбер көсләрәкбеҙ унан. Көрәште лә ни тиклем иртәрәк башлайбыҙ, шул тиклем яҡшыраҡ: ҡорбандар ҙа әҙерәк булыр. Тиҫтәләгән йылдар ағымында был афәт былай ҙа ирҙәрҙең иң аҫылын, эшлеклеһен теге донъяға алып китте. Ундайҙар эскелектә лә эшләгән сағындағылай әрһеҙ булалыр инде. Әйҙәгеҙ, эскенән ҡотолоу юлдарын бергәләп эҙләп ҡарайыҡ.

Араҡы кешене яйлап ҡына үҙ ҡоршауына ялмай бара һәм ниməһе ҡыҙыҡ: эскән кеше шуны тоя тойоуон, ваҡыты-ваҡыты менән артҡа ла әйләнеп ҡарап ала, тик "ташлай алам әле", тип, үҙенүҙе йыуата. Ошо мәхшәрҙә үтмәйенсә тороп, был ҡазаны ҡаза итеп ҡабул итә лә алмайбыҙҙыр, нықлы ҡарарға ла килә алмайбыҙҙыр, бәлки. Тик аңлағас, ваҡыт үткән була. Быны ошо мәлдә яҡындарҙың ярҙамға килеүе мөһим дә инде. Уларҙың һиңә ҡарата мөнәсәбәте бик ҙур роль уйнай. Эскесе тип түгел, ә үҙҙәренә тиң хоҡуҡлы яҡыны итеп ҡарарға кәрәк. Быны шунда ғына был ағас емеш бирәсәк - эскелеккә әүрәгән кеше ҡотола аласаҡ.

Әйткәндәй, бер-нисә йыл элек үҙәк баҫмаларҙың береһендә баҫылған бәләкәй генә мәкәлә иғтибарҙы үҙенә йәлеп иткәйне. Унда һүҙ Һиндостандағы бер хәл тураһында бара. Ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, ҡырағай филдәр өйөрө килеп сығып, тотош ауылдарҙы емереп, ҡыйратып китә. Властар хафаға ҡала: был ни ғәләмәт? Филдәр бер ваҡытта ла кешеләр йәшәгән ерҙәрҙә үҙҙәрен былай "ҡырағай" тотмай ҙа баһа. Асыҡланыуынса, баяғы хайуандар джунглиҙа бешеп етеп, әсегән емеш-еләкте ашарға әүәҫләнеп алған икән. Шуға ҡоторонғандар. Кешене эскегә сит планеталарҙан килеп кемдер өйрәтеп китмәгәндер бит. Эскене тәү тапҡыр тәмләгән кешеләр ҙә, моғайын, шул әсегән емеш-еләк ашағандыр....

Был һаҙлыҡтан үҙемдең нисек ҡотолоуым тураһында бәйән итәйем. Рюмка тотоуҙы беҙ йәш саҡта башланыҡ: Тәүҙә "батырлыҡ, ҡыйыулыҡ өсөн" эстек, унан ары тәрлә сараларҙы, байрамдарҙы "йыуып" эстек һәм үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, бахмурҙан баш төҙәтәбеҙ, тип тә эсә башланыҡ. Шулай яйлап егерме йәшлек сағыбыҙҙы - утыҙ, утыҙ йәшебеҙҙе - ҡырҡ йәш алмаштырҙы. Тамам ялҡытты, бизрәтте был эскелек. Ара-тирә генә булып ала торған айыҡ мәлдәр - иң ҡыйын саҡҡа әүерелде бер саҡ. Айыҡып, аҙ ғына йөрөнөнмө, башты күнелһеҙ уйҙар солғап ала башлай. Айыҡ тормошҡа бөтә юлдар ҙа ябыҡ һымаҡ тойола. Эскән кешенең үлемгә иң яҡын торған мәлдәре ошолор ҙа, моғайын, сөнки тап ошо ваҡытта үлемде тәрлә сүрәттә күҙ алдына килтерә башлайһың икән. Эсмәй йөрөүгә аҙна, ай тулып китә, әммә бер юҡ ҡына сәбәптән эсәһең дә ҡуяһың. Беҙ бит бер ҡасан да; "Кана әле, тәгәрәгәнсә эсеп алайым", - тимәйбеҙ, ә: "Берәй йөҙ грамм ғына тотайым", - тип башлайбыҙ. Ул уйыбыҙ ҙа изге һымаҡ тойола үҙебеҙгә. "Һыныҡ яҙабыҙ", йәнәһе. Яйлап һиҙә башланым: эшлектән сығып барыла, һаулыҡ та ҡаҡшағандан-ҡаҡшай, әммә эскене ташлар өсөн ниндәйҙер бер ҙур сәбәп көтәм. Бәхеткә күрә, ул сәбәп - Ырымбур өлкәһе Абдулла ауылынан Шәмсиә әбей булып сыҡты. Автобусҡа ҡырҡлаған кеше тейәлешеп барып, айыҡып ҡайттыҡ бер көн. Өс айҙан һуң тәмәкенән ҡотолайым, тип, тағы барҙым Ырымбур әбейенә. Әммә Шәмсиә әбейҙең үҙем тураһында әйткән насар күрәҙәлеген ишетеп, тәшөнкөлөккә бирелдем һәм ярты сәғәттән ҡабат тарттым һәм бер ниндәй ҙә үҙгәреш тә, һөҙөмтә лә һиҙмәнем. Ул хәбәре, бәхеткә күрә, дөрөҫкә сыҡманы, ә тәмәкене тағы 9 йыл көйрәттем. Бергә барған 40 кешенең 37-һе ҡабаттан эсте, әбейҙең көсө тәьҫир иттеме, эскенәнме, башҡа сәбәптәнме, яңынан эсә башлағандар араһында кемдәрҙер үлеп тә ҡалды. Үҙемдең ун йыл эсмәүемә Шәмсиә әбейгә рәхмәтлемен, уның алдында баш эйәм. Эсеүҙе ташлағас, миңә: "Һинең ихтыярың көслө", - тип әйтеүселәр күп булды. Иң ғәжәбе шул: эскене ташлаған көндән алып хәҙергәсә араҡы эсеп ҡарау теләге бер генә лә уянманы. Эскелек тенкәмә, зитыма ныҡ тейгәндер, күрәһең.

Ә хәҙер ябай арифметикаға күҙ һалайыҡ. Үҙ ғүмеремдең 25 йылы эске томанында үтте, ул дәүерҙә бер ниндәй ҙә мал йыя алманым - атай менән әсәйҙең "елеген" генә һурҙым, нервыларын бөтөрҙөм. Ирмен тигән ир өсөн был - ҙур ғәрлек. Атайым иҫән саҡта алкоголдән йөҙ бороп өлгөрөүем генә күңелде бер аҙ йыуата - ул минең өсөн ҡыуанып, ризалығын биреп китте.

Айыҡ тормош башлауыма ни бары ун ғына йыл, ә элекке тормошом менән хәҙергеһе араһында айырма - ер менән күк араһы. Ғаиләм ныҡыныды, мал-тыуарым ишәйҙе, малдарҙы көтөүлеккә сығарыуы оят түгел. Бынамын тигән ике яраҡтан улым, өр-яңы ҡорос атым бар. Әлбиттә, был еңеүҙәрҙе яулағанда эргәмдә яуырындарын, арҡаларын терәгән яҡындарым булды, улар һау булһын, бер үҙемә, ай-һай, ҡыйынға тура килер ине. Мине бер һорау һер ваҡыт ҡыҙыҡһындыра: яуланған еңеүҙәрҙең тәмен йәнең-тәнең менән татыу, аңлау өсөн мотлаҡ һынау-ҡаршылыҡтарҙы үтеү, йырып сығыу кәрәкме икән ни? Ошо ҡытыршылыҡтарҙы үтмәй тороп, яуланғандың ҡәҙере булмаймы?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эскән саҡта берәй мәл ошолайтып айыҡ тормошто пропагандаларын, тип башыма ла инеп сыҡмай ине. Әхмәр-Ғүмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" исемле китабын уҡып сыҡҡандан һуң бик күп хәтирәләр иҫкә төштө, йәш саҡҡа ҡарата һағыш тойғоһон да уятты. Бик күп оҡшашлыҡтар тапҡандай булдым был китапта яҙылғандар һәм үҙемдең тормош менән. Рәхмәт уға! Кәңәшем шул: эсһәгеҙ, үҙегеҙҙе берүк бөтөрөп ташламағыҙ, ә бер аҙға ғына сафтан сыҡҡанһығыҙ итеп хис итегеҙ. Эскенән туҡтау бер ваҡытта ла һуң түгел, шул уҡ ваҡытта иртә лә түгел, шуны беләйек. Көндән-көн ишәйә барған айыҡ тормош алып барыусылар сафы тулылана бара, беҙ ҙә баҫайыҡ унда бөгөндән!**

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Темәс ауылы.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 ноябрь "Һөйөм, һағынам..."** (М. Ғиләжев), комедия
**17 ноябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия
**18 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия
**19 ноябрь Гөлли Мөбәрәкованың** юбилей кисәһе
**20 ноябрь "Минең ғаиләм"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама

### М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театры

**16-18 ноябрь** Силәбе Йәштәр театры гастролдәре

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 ноябрь Рәжәп Вәдүтовтың** юбилей кисәһе
**16 ноябрь Вәхит Хыҙыров** дуҫтарын саҡыра
**23 ноябрь Әлфиә Юлсуринаның** концерты
**24 ноябрь** БР атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Сибғәт Яруллиндың** юбилей концерты

### Бәйге! Бәйге!

**16-18 ноябрҙә Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында Йомабай Иҫәнбаев исемендәге призға ҡурайсылар бәйгеһе үтәсәк.**

Ҡурайҙа уйнаусы талантларҙы табыу һәм артабан үҫтереү, йәштәрҙе башҡорт инструменталь фольклорына ылыҡтырыу һәм күренекле ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы уҙғарылған был бәйгелә үҙешмәкәр һәм профессиональ ҡурайсылар һәм ансамблдәр ҡатнаша ала. Мәғлүмәт алыу өсөн Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Бишева урамы, 17/2 адресы буйынса мөрәжәғәт итергә. Бәйләнеш өсөн телефон:
**(374) 289-66-47, 8-960-39-80-294.**

## ХОККЕЙ

# БОҘ ҠУҘҒАЛЫРМЫ?

**"Салауат Юлаев"тың 2011-2012 йыл Континенталь хоккей лигаһы чемпионатында әлегәсә булған уңышһыҙлыҡтары баш тренер Сергей Михалев менән контрактты өҙөүгә алып килде. Команданың ваҡытлыса баш тренеры вазифаһы Венер Сафинға йөкмәтелде.**

Силәбе ҡалаһының "Трактор" командаһы менән көс һынашыу һөҙөмтәле булды. Юлаевсылар Көнсығыш конференция лидерҙарының береһе "Трактор"ҙы 4:0 иҫәбе менән ҡыйратты.

Ә Ҡаҙағстандың "Барыс"ы менән көрәше көсөргәнешле һәм ауыр буласағы алдан уҡ билдәле ине, сөнки, беренсенән, көслә уйынсылар менән тулыландырылған "Барыс" һуңғы дүрт уйында ла еңеүгә өлгәште, ә, икенсенән, юлаевсыларҙың бер-нисә уйынсыһы имгәнеү сәбәпле, уйындарҙа ҡатнаша алманы. Шулай ҙа "Салауат Юлаев" боҙ майҙанына тик еңеүгә йүнәлтелгән кәйеф менән сыҡты һәм уйындың өсөнсө минутында уҡ шәп уйын күрһәтте. Олег Сапрыкин, Виктор Козлов һәм Александр Радуловтың комбинацияһы гол менән тамамланды. Үкенескә ҡаршы, беренсе осорҙа Виктор Козловтың имгәнеүе команданың беренсе звеноһын үҙәк һөжүмсеһеҙ ҡалдырҙы һәм уйын һөҙөмтә бирмәне.

"Барыс" командаһы икенсе осорҙа тиҙлеген арттырҙы һәм һөҙөмтәлә иҫәпте тигеҙләп кенә ҡалманы, ә юлаевсылар ҡапҡаһына тағы ла ике шайба оҙатырға мөмкинлек тапты. Уйын тамамланыр алдынан Олег Сапрыкин иҫәпте икегә еткерһә, "Барыс" йәнә бер гол менән яуап бирҙе. Һөҙөмтәлә уйын "Барыс" файҙаһына 2:4 иҫәбе менән тамамланды.

10-13 ноябрҙә уҙасаҡ Евротур уйындары башланыу сәбәпле, КХЛ чемпионатында әлегә тәнәфес. "Салауат Юлаев" 15 ноябрҙә Түбәнге Кама ҡалаһында урындағы "Нефтехимик" командаһы менән көс һынашасаҡ.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

✓ *Никах - йоланың яртыһы ғына, ҡалған яртыһы - түҙемлек.* (Махома).



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БАШҠОРТ ЯУГИРҘАРЫ...

## Германияла



**Халыҡтар һуғышының 198-се йыллығын билдәләү өсөн Германияның Лейпциг ҡалаһына күпләп йыйылған халыҡ араһында байрамға килгән 10 башҡорт яугиры барыһының да иғтибар үҙәгендә булды.**

Башҡорт яугирҙары, 198 йыл элекке кеүек үк, уҡтан атыу мәргәнлеген күрһәтеп, барыһының да һушын алды. Ҡунаҡтар башҡорт яугирҙарының ук-һаҙағын, кейемен, бүреген тотоп ҡарарға ынтылды, уларҙы үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы һәм башҡорт яугирҙары менән фотоһүрәткә төшөүҙе бер мәртәбә күрҙе. Париждан килгән Наполеонды кәүҙәләндергән француз да тантаналы сараларҙан һуң башҡорт яугирҙары менән фотоһүрәткә төштө һәм Илдар Шәйәхмәтов башҡарыуында ҡурай һәм ҡумыҙ моңон ҙур ихласлыҡ менән тыңланы. "Төньяҡ амурҙары" етәксеһе Наполеонға ҡумыҙ, ә "бөйөк полководец", үҙ сиратында, Илдар Шәйәхмәтовҡа - көмөш, ә "Өфө йәйүләләр полкы" етәксеһе Рәмил Насибуллинға Наполеон портреты төшөрөлгән алтын тәңкә бүләк итте.

Тантана һуңында Лейпцигтағы башҡорт яугирҙарына ҡуйылған һәйкәл янында яуҙа һәләк булғандар иҫтәлегенә намаҙ уҡылды.

**Нәсур ЙӨРӨШБАЕВ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕК КЕЙГӘНДЕҢ...

## барыһы ла батыр түгел

Әхлаҡты камиллаштырыуҙың сере шунда: һәр көнөңдө ғүмереңдең һуңғы көнө һымаҡ йәшә -тулҡынланма, ҡурҡма, ҡыланма.

**(Марк Аврелий).**

Дөрөҫөн әйткәндә, никах - ул яуызлыҡ, ләкин һәр кемгә кәрәкле яуызлыҡ.

**(Сократ).**

Намыҫлы, әммә ҡыҫҡа ғүмер онтыһыҙ, әммә оҙон ғүмерҙән өҫтөн тора.

**(Эпиктет).**

Еңә алмаған ҡаршылыҡҡа ҡаршы сыҡма.

**(Аттила).**

Никах - йоланың яртыһы ғына, ҡалған яртыһы - түҙемлек.

**(Махома).**

Бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөп үҙ-үҙеңдән ҡасып булмай.

**(Эрнест Хемингуэй).**

Күҙҙәр берҙе һөйләп, тел икенсене һөйләгәндә, тәжрибәле кеше уларҙың тәүгеһенә ышана.

**(Ралф Эмерсон).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт:**

**"-Хөрмәтле Уҡытыусым, - тип мөрәжәғәт итә бер ваҡыт уҡыусыһы Уҡытыусыһына, - мин тормошта үҙ маҡсатыңа өлгәшеүҙең ун принцибы бар тип ишеттем, тик улар тураһында бер ни ҙә белмәйем.**

**-Мин ул принциптарға һине өйрәтә алмайым, - тип яуаплай Уҡытыусы. - Әммә ул принциптарға өйрәтә ала торған кешеләрҙе беләм...**

**-Кемдәр һуң улар? - тип һорай уҡыусы.**

**-Тәүге өс принципҡа һине бала, ҡалған етәүһенә уғры өйрәтә алаҫаҡ, - ти Уҡытыусы аптырап ҡалған уҡыусыһына. - Эйе, беренсенән, баланан һин һис ниндәй сәбәпһеҙ ҡыуанырға, икенсенән, бер минут та тик ултырмаҫҡа, өсөнсөнән, теләгәнеңде ҡыҫҡырып һәм ныҡышмалы талап итергә өйрәнерһең.**

**-Ярай, хөрмәтле Уҡытыусым,- ти уҡыусы,- ә уғры мине нимәгә өйрәтә ала һуң?**

**-Беренсенән, эшеңде йәшерен эшләргә, икенсенән, әгәр эшеңде бер төн эсендә тамамламаһаң, уны икенсе төндә лә дауам итергә, өсөнсөнән, бер юлда йөрөгән дуҫтарыңды һәм иптәштәреңде хөрмәт итергә, дүртенсенән, маҡсатыңа өлгәшеү өсөн ғүмереңде лә бирергә, бишенсенән, бар булған нәмәңде ябай ғына булһа ла яңыға алмаштырырға ҡурҡмаҫҡа, алтынсынан, бер ниндәй ҡаршылыҡтар алдында ла ҡаушап ҡалмаҫҡа, етенсенән, үҙ эшеңә тоғро ҡалырға өйрәтер".**

*КӘКРЕ МӘҠӘЛДӘР*

# КЕМ ЭШЛӘМӘЙ...

## шул эшһеҙ

- Бер сәскә яланды матурламай, ике сәскә ҡәберҙе матурлай.
- Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙәр һум бирерлек йөҙ дуҫың булһын.
- Беләге бар берҙе йығыр, беләге юҡ - зәғиф.
- Беләге бар берҙе йығыр, ике беләге бар икене йығыр, өс беләге бар - мутант, белмәгәндең беләге тынғыс.
- Батыр бер үлер, ҡурҡаҡ ҡасып ҡотолор.
- Яҡшы һүҙ һөйөндөрә, яман һүҙ һүгендерә.
- Йүгереп ҡуян ҡыуалар, ултырып хәл йыйылар, шунан тота алмаҫтарын аңлағансы тағы ҡыуалар.
- Насар арба юл боҙор, насар түрә ришүәт алыр.
- Аҡыллы ир ҡатын алмаҫ.
- Кеше һүҙе кеше үлтерә, тутыйғош һүҙе кеше көлдөрә.
- Кем эшләмәй, шул эшһеҙ.
- Тыуған ерҙең туйған ер булыуы яҡшы.
- Тураһын әйткән - етәксегә ярамаған.
- Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, ҡайҙа йөрөнөң, тип әрләрҙәр.
- Бер тинлек ҡуян - булған бит хаҡтар!

**Морат СОЛТАНОВ.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# БЫНАУ ҠАЛАЙ ТЫМПА ӘЛЕ...

**Алай ҙа уай, былай ҙа уай** - бер нисек тә килеп сыҡмай, аптырағандан әйтелгән һүҙ.
**Сәпсәнләү** - ашар -ашамаҫ ултырыу.
**Бәнәмәт** -карттарҙың һүгенеү һүҙе.
**Дыңай** - танау менән һөйләшкән кеше.
**Өңкәйтеү** - отоу, берәүҙе нимәләләр еңеү.
**Думбырлаҡ** (ат ҡыңғырауы дуңғырлаҡ түгел) - сәхнәнән яңғыраған йырға таҡтырылған ҡолаҡ ярғыс музыка.
**Мукшы** - һаран, һыҡмыр кеше.
**Тымпа** - көүҙәһе ауыр, килбәтһеҙ кеше.
**Ҡатып ҡалың!** - элекке башҡорт әрмеһендә "смирно!" урынына ҡулланылған һүҙ.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

*АТЫҢ КЕМ?*

# МОРАҘЫМ...

## моратына ирешер, тигәнде аңлата



"Исем кешенең яҙмышына тәьҫир итә, яҙмышын билдәләй", тигән ҡараш йәшәгән борон халыҡтарҙа. Исемгә ҡарап, кемдең ниндәй милләттән икәнен дә билдәләргә була. Бөгөн мин һеҙҙе бик шәп башҡорт малайы менән таныштырмаҡсымын. Исеме лә саф башҡортса яңғырай уның - Мораҙым! Был һөйкөмлө малайға ҡарап һоҡланмаған кеше юҡтыр ул. Мораҙым Ишембәтовҡа әле 2 йәш. Альбина менән Морат Ишембәтовтар ғаиләһендә көтөп алынған бала булғанға күрә, атаһы үҙ исеменә оҡшатып, ошо матур исемде ҡуша ла инде. Был исем башҡорт халҡында элек-электән билдәле. Мораҙым - "моратына еткән, теләгенә өлгәшкән" тигәнде аңлата. Әлегә балалар баҡсаһына йөрөгән Мораҙым, ҙурайғас, һис шикһеҙ, теләгәненә өлгәшер.

**Лилиә ЯМАЛОВА.**


1158221891100 6

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 4468